*Томас Эдисон тигән бер аҡыл эйәһе шулай тигән:"Даһи - ул бер процент талант һәм туҡһан туғыҙ процент хеҙмәт". Әлбиттә, хеҙмәтһеҙ үҙ кеүәтеңде тормошҡа ашырыу һәм уңышҡа өлгәшеү мөмкин түгел. Ә шулай ҙа донъяны яҡшыға үҙгәртеү теләге менән илһамланыу һәм яңыу ҙа уңыш нигеҙенең тос өлөшөн тәшкил итәләр, тим".*

**Робин ШАРМА.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20 - 26 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №8 (374)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡотҡосоға ҡуш күренәме,**

йәки Башҡортостанда экстремизм күлдәген кем тегә?



5

**Тау аҡтарырға һәләтле булып та...**

йылғала балыҡ юҡлыҡҡа зарланырһыңмы?



8

**Тарихыңды яҡшы белеү...**

сит ерҙә абруйыңды күтәрә



9

**Мөхәббәтте аңлатҡанда...**

грамматикаға һыйып булмай, имеш



12

14 ТВ-программа


...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ВЕТЕРАНДАР МЕНӘН ОСРАШЫУҘАР

## рәхмәтле лә, күҙ йәшле лә...

**Ошо көндәрҙә республикабыҙҙа РФ Президенты Указына ярашлы Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандарына "1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 65 йыллығы" юбилей миҙалдарын тапшырыу тантаналары үтә. Сараны башлап ебәреп, 28 ғинуарҙа Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Республика йортонда 25 ветеранға тапшырғайны был миҙалдарҙы.**



Үткән аҙнала рәхмәт һүҙҙәренә, күңел тулышыуҙарға һәм шатлыҡлы күҙ йәштәренә бай был тантаналар баш ҡалабыҙ Өфө райондарында үтте. Мәҫәлән, Октябрь районында ғына ла 4 981, Совет районында 4 774 ветеранға ошондай хөкүмәт наградаһы тапшырыласаҡ. 9 майҙа билдәләнәсәк Еңеү байрамында юбилей миҙалы бар ветерандарҙың да (улар иҫәбенә һуғышта ҡатнашыусылар, тыл хеҙмәтсәндәре, концлагерь тотҡондары инә) түштәрендә балҡып торасаҡ.

Кисә Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтендә лә үтте был тантана. Хакимиәт башлығы Павел Качкаев үҙ ҡулдары менән 44 ветеранға ошо иҫтәлекле миҙалдарҙы тапшырҙы."Өфө ҡалаһында ветерандар республикабыҙ етәкселегенең даими хәстәрлеген тойоп йәшәй. Һеҙҙең тормошто еңеләйтеү, уны хәстәрлек һәм йылылыҡ менән солғау өсөн беҙҙә бөтәһе лә эшләнә", - тине Павел Рюрикович үҙенең ҡотлау һүҙендә.

Еңеүҙең юбилей миҙалдарын тапшырыу тантанаһының Ватаныбыҙҙы һаҡлаусылар көнө алдынан үткәрелеүе икеләтә шатлыҡлы булды ветерандар өсөн. Ғөмүмән, шатлыҡҡа, рәхмәткә тулышыуҙары йөҙҙәренә сыҡҡайны уларҙың. Улар баш ҡалабыҙҙа һуғышта ҡатнашҡан ветерандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса бик күп изге ғәмәлдәр башҡарылыуы, фатирҙарға ремонт эшләнеүе, даими рәүештә диспансер тикшеренеүе үткәрелеүе тураһында һөйләне. Төрлө уҡыу йорттарында булып, уҡыусылар һәм студенттар - илебеҙҙең буласаҡ һалдаттары менән осрашыуҙар үткәреүҙәрен дә телгә алды, киләсәктә ил-йортобоҙҙоң тыныс һәм имен булыуын теләне, ихлас рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Уҡыусы балалар ветерандарға сәскә гөлләмәләре бүләк итте, ә һуңынан ветерандарҙы баш ҡаланың "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле ҡотланы.

БАЙРАМ УҢАЙЫ МЕНӘН

# ЫСЫН ИР-ЕГЕТТЕ...

## кемгә оҡшатаһың?

**Һеҙ кемдәрҙе илгә таяныс булырҙай, халҡыбыҙ ҡеүәтен, рухын һаҡларҙай ир-азамат итеп күрәһегеҙ? Ғөмүмән, кем ул бөгөнгө ысын ир-егет? Ул ниндәй сифаттарға эйә? Бөгөн ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ үҙе идеал итеп күргән көслө затты башҡорт донъяһында исемдәре билдәле ҡайһы шәхескә оҡшата? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп, төрлө йәштәге гүзәл заттарыбыҙға мөрәжәғәт иттек. Йөҙҙән ашыу ҡыҙ-ҡатындың яуаптарын дөйөмләштереп, түбәндәге ҡыҙыҡ ҡына һығымталарға килдек.**

Нимәһе ҡыҙыҡ? Алыҫ булмаған үткән йылдарҙа ҡыҙ-ҡатындарҙың сәнғәт һәм мәҙәниәт әһелдәрен идеал итеүе билдәле. Беҙҙең әсәйҙәрҙең, апайҙарҙың иҫке альбомдарында әле булһа Рәсәй, СССР кимәлендәге киноартистарҙың һарғайып бөткән фотолары һаҡлана. Өлкәнерәк быуын апайҙар һөйләүенсә, ундай идеалдар үҙебеҙҙең республика сәнғәт һәм әҙәбиәт донъяһында ла булған. 70-80-се йылдарҙа, мәҫәлән, Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Фидан Ғафаров күп ҡыҙ-ҡатындарҙы үҙенә ғашиҡ иттергән, уфтандырған, тиҙәр. Сәхнә әһелдәренә ғашиҡ булыу, уны кумиры итеп табыныу йәштәр араһында әле лә бар ул. Ләкин был тиҙ үтеп китә торған мауығыу. Беҙ башлыса ана шул мауығыуҙары үткән, тормошҡа етдиерәк ҡараған ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ менән һөйләштек һәм... үҙебеҙсә ниндәйҙер асыш та яһаныҡ.

Бөгөн ҡыҙ-ҡатындар күңелен тышҡы ялтырауыҡ түгел, күберәк көслө заттағы рухи-әхлаҡи, интеллектуаль ҡиммәттәр арбай икән дәһә! Әйтәйек, 16-18 йәшлек ҡыҙҙар Ғайса Хөсәйенов, Рәшит Шәкүр, Ноғман Мусин кеүек әҙәбиәт аҡһаҡалдарына һоҡлана, уларҙы ысын ир-уҙаманға тиңләй. Өлкән ханымдарҙың ил ағаһы булырҙай ир-азаматтарыбыҙға оло ихтирам йөрөтөп, уларға күңел йортоноң бер мөйөшөндә урын табып, рухи таяныс, аҡыллы кәңәшсе булараҡ йәшәтеүе лә көтөлмәгәнсәрәк яңғыраны.


**(Дауамы 2-се биттә).**

*✓ Аралашыу мөмкинлектәре ни тиклем артҡан һайын, кешеләр бер-береһенән шул тиклем алыҫлаша. Күңелен ҡыйған, хәтерен ҡалдырған кешең янына үҙең барып, күҙҙәренә тура ҡарап, ғәфү үтенеүгә ни етә?*



*ПАРАДОКС*

# ЯРАТМАҺАМ, ҒӘФҮ ИТЕР ИНЕМ, ## ратҡанға ғәфү итмәйем…

**Шағирә Зөһрә Ҡотлогилдинаның ошондай шиғыр юлдары бар. Берәү әйтер: яратҡан кеше ғәфү итә белә, яратмаған ғына ғәфү итмәй, ә былар - шиғыр юлдары ғына, фекерҙе көсәйтер өсөн генә шағирәгә ошондай парадоксаль алым кәрәк булған һ.б. Ысынлап та, ниндәй тойғо һуң - ғәфү үтенә һәм ғәфү итә белеү? Уларҙың, шиғырҙа әйтелгәнсә, парадоксаль асылы нимәлә? Ошо хаҡта фекер йөрөтәйек.**

Яңыраҡ Өфөлә ғәфү үтенеү хеҙмәте барлыҡҡа килеүе лә юҡҡа түгел. Ул хеҙмәттең төп маҡсаты - төрлө сәбәптәр арҡаһында һүҙгә килешкән, дәғүәләшкән, ирешкән, талашҡан, бер-береһен күрәлмаҫтай хәлгә еткән, әммә бер-береһенә ҡарата тәүге килешеү аҙымын яһарға баҙнат итмәгән, тартынған яҡтарҙы, айырым кешеләрҙе киренән дуҫлаштырыу, татыулаштырыу, бер яҡты ғәфү үтендереү, икенсе яҡты ғәфү иттереү. Әлбиттә, бының өсөн хеҙмәт клиенттарҙан ғәфү үтенеү һәм ғәфү итеү хаҡын ала. Мәҫәлән, телефон аша ғәфү үтенеү һәм кисерелеү хаҡы 300 һум тора. Ғәфү үтенеү хеҙмәте шулай уҡ кешеләрҙең фатирҙарына, эшләгән урындарына килеп, ғәфү һораусының үтенесен еткерергә мөмкин. Ул саҡта инде хеҙмәт күрһәтеү хаҡы юғарыраҡ, кемдер өсөн ғәфү үтенергә килеүселәр "зыян күреүсегә" күстәнәс, сәскәләр йә бағышлама шиғыр тотоп та килә ала. Әйтәйек, тағы ла бер шағир әйтмешләй, ошолайыраҡ юлдар:

Ғәфү итеүеңде һорамайым,
Ғәфү итереңде белгәнгә...

Был хеҙмәттә профессиональ психологтар эшләйәсәк. Күп осраҡта ғәфү үтенеү мәсьәләһе буйынса был хеҙмәткә ир-аттар мөрәжәғәт иткәне лә билдәле.

Кешеләрҙе яраштырыусылар, килештереүселәр, заман теле менән әйткәндә, аралашсылар, илселәр, яусылар элек тә булған. Шулай ҙа хәҙерге бәйләнештәр мөмкинлеге сикһеҙ күп тиҙлек быуатында ошондай хеҙмәт барлыҡҡа килгән икән, был хәл уйландыра барыбер. Кешеләр араһындағы аралашыу мөмкинлектәре ни тиклем артҡан һайын, улар бер-береһенән шул тиклем алыҫлаша. Был хеҙмәт барыбер ҙә әҙәм балаларының виртуаль аралашыу даирәһен киңәйтеүгә булышлыҡ иткән кеүек. Күңелен ҡыйған, хәтерен ҡалдырған кешең янына үҙең барып, күҙҙәренә тура ҡарап, ғәфү үтенеүгә ни етә?

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Беҙҙең гәзит битендә "Ғәфү ит" рубрикаһы әллә ҡасан асылды. Унда бер тин дә түләмәйенсә лә хәтерен ҡалдырған кешең алдында ғәфү үтенергә була.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*БАЙРАМ УҢАЙЫ МЕНӘН*




**(Башы 1-се биттә).**

Беҙҙең менән аралашҡан ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙың күбеһе ил хәстәрен үҙ иңенә алған Мортаза Рәхимов, Раил Сарбаев, Илдус Илишев, Фәтих Ҡаҙаҡбаев кеүек республика етәкселәре, Зөфәр Еникеев, Рафаэль Зиннуров кеүек сәйәсмәндәр, Зиннур Йәрмөхәмәтов, Рауил Бикбаев, Әхмәт Сөләймәнов, Рәшит Шәкүр, Ноғман Мусин, Марат Аҙнабаев кеүек тәрән аҡылы, фәһемле кәңәштәре аша үҫеп килеүсе быуынды шәхес булараҡ тәрбиәләүсе ғилем эйәләре, Фәнзил Әхмәтшин, Артур Иҙелбаев, Данир Ғәйнуллин, Илшат Солтанов, Азамат Ғәлин, Тимур Лоҡманов кеүек йәштәрҙе алға әйҙәүсе лидерҙар, шулай уҡ Таһир Ишкинин, Әхмәр Үтәбаев, Азамат Юлдашбаев кеүек матбуғатта төплө, тос фекерҙәре, үткер ҡәләме менән ҡыйыу сығыш яһаған, халыҡты хәҡиҡәткә яҡынайтып, үҙ асылына ҡайтырға саҡырған ижадсылар өсөн тауыш бирҙе.

Сәнғәт кешеләре араһынан аталған кешеләргә лә ниндәйҙер тышҡы йөҙ, буй-һынға ҡарап һоҡланыу түгел, ә башҡорт сәнғәтендә яңы юл ярған, юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән һәм ижады аша йәштәрҙе дәртләндергән, әйҙәгән, тәрбиәләгән өсөн хөрмәт белдерелде. Бына күп ҡыҙ-ҡатындар атаған ул исемдәр: Рәсүл Ҡарабулатов, Роберт Юлдашев, Сәғиҙулла Байегет, Рөстәм Ғиззәтуллин, Ғәзим Ильясов, Илдар һәм Асҡар Абдразаҡовтар, Азат Йыһаншин, Айрат Абушахманов, Хөрмәтулла Үтәшев, Риф Ғәбитов, Рәмил Ғәйзуллин, Ишморат Илбәков, Юлай Ғәйнетдинов.

Шулай уҡ башҡорт донъяһын сит тарафтарҙа танытыуға ҙур көс һалған эшлекле егеттәребеҙҙән Әмир Ишемғолов, беләге менән генә түгел, ихтыяры һәм рухы менән дә көслө заттар Вәкил Ильясов, Эльбрус Ниғмәтуллиндар хаҡында ла, ысын ир-уҙамандар тап шундай булырға тейеш, тигән һығымталар яһалды.

Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ менән әңгәмәләшкән саҡта үҙҙәре һоҡланған ир-егетте ни өсөн, ниндәй сифаттарына, эштәренә ҡарап ихтирам итеүҙәрен асыҡлап, бер ни тиклем ҡылыҡһырлама алыуға ла өлгәштек. Мәҫәлән, улар фекеренсә: "Рәсәйҙә Мортаза Рәхимов кеүек идара иткән аҡыллы етәксе юҡ". "Бөгөнгө көн сәйәсмәне Раил Сарбаев кеүек талапсан, тура һүҙле, етди фекер йөрөткән эш кешеһе булырға тейеш". Шулай уҡ бер туған Шаһиевтарҙы телгә алып: "Һәр ғаиләлә бер туған Шаһиевтар кеүек талантлы етәкселәр, лидерҙар тәрбиәләнергә тейеш, беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, балаларыбыҙҙың бына шундай шәхестәр булыуына өлгәшергә тейешбеҙ", - тине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күрәһегеҙ, ҡыҙ-ҡатын донъя ғәме менән йәшәүҙе дауам итә. Хис-тойғоға ҡарағанда етдилекте өҫтөн күрә. Ул үҙ күңелен генә уйлап, күктә балҡыған буй етмәҫтәй сағыулыҡҡа ынтылмай, ә ошо донъяны ҡотҡарырҙай, ил терәге булырҙай аҡыллы, алдынғы ҡарашлы, ышаныслы, рухлы, көслө ихтыярлы ир-егеттәребеҙҙе күтәрә, данлай. Ул ошондай сифаттарҙы ысынбарлыҡта үҙенең атаһында, ағаһында, тормош иптәшендә лә күрергә теләй.**

**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев шәхси ярҙамсы хужалыҡтарға ауыл хужалығы техникаһы менән ярҙам итеү өсөн средстволар бүлеү хаҡындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Быға тиклем үк Хөкүмәт тарафынан кисектереп түләү юлы менән ауыл хужалығы техникаһы һатыуҙың параметрҙары билдәләнгәйне. Түләүҙе ун йылға кисектереү шартында тәүге иғәнә 10 проценттан артырға тейеш түгел, тигән талап ҡуйылғайны. Шул саҡта, мәҫәлән, "Беларусь" тракторы һатып алғанда ай һайын 5-5,6 мең самаһы түләргә кәрәк буласаҡ, шул уҡ ваҡытта түләү күләме кәмей барасаҡ. Бойороҡҡа ярашлы, быйыл да ауыл кешеләре "Беларусь" тракторы, пресс-йыйғыс, бесән сапҡыс, күбә ташығыс, тағылма, тырма, һабан, кәбән һалғыс, ваҡлағыс, һөт һауыу ҡорамалдары һатып ала ала.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев 2010 йылда республика биләмәһендә яҙғы ташҡынды аварияһыҙ үткәреү буйынса саралар планын раҫланы. Билдәләнеүенсә, ташҡын алдынан шартлатыусы биш авария бригадаһы айырым маҡсатлы инструктаж үтәсәк, ә 15 марттан юғары хәүеф объекттарында тәүлек әйләнәһенә дежурлыҡ ойоштороласаҡ.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкселегендәге республика делегацияһы Финляндияла эш сәфәре менән йөрөп ҡайтты. Һөйләшеп килешеүҙәрҙең төп темаһы - ағас эшкәртеү тармағында хеҙмәттәшлек итеү, Финляндия тәжрибәһен өйрәнеү. "Оҙаҡ ултырған ағастар күбәйә бара, - тип, был проблеманы бер нисә тапҡыр күтәреп сыҡҡайны Премьер-министр,- тик эш ағасты тамырында көйө һатыуҙан ары китмәй. 5,5 млн га урман булғанда, нефть эшкәртеү менән нефть химияһына ғына ҡарап ҡалыу ярамаҫ. Ғәмәлдәге предприятиеларҙы үҙгәртеп ҡорорға, түбән сортлы һәм йомшаҡ япраҡлы ағасты тәрән эшкәртеү буйынса производство ҡеүәттәре булдырырға кәрәк".

✓ Былтыр республикабыҙҙа 2 млн 352 мең кв метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Ошо күрһәткес менән Башҡортостан Волга буйы федераль округында - беренсе, ә Рәсәй буйынса бишенсе баҫҡыста. Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларынан һәм Мәскәү өлкәһе, Краснодар крайынан ғына ҡалышабыҙ. Шулай уҡ 1,9 млн кв метрҙан ашыу аҙ ҡатлы йорттар төҙөлгән.

АҘНА ШАНДАУЫ

# МАРИҘАР БЫНЫ БАШЫНАН ҮТКӘРҘЕ,

## сират беҙгә етте, күрәһең...

**Йәмәғәт, ҡапыл ҡарауға сәйер генә тойолған бер һорау бирмәксемен әле. "37-се йыл ҡасан башланған икән?" - тип уйланғанығыҙ юҡмы? Әлбиттә, 1 ғинуарҙан, тип ғәжәпләнерһегеҙ, моғайын. Автор хыяллана башланымы әллә, тип фаразлауығыҙ ҙа ихтимал. Юҡ шул. Бәлки, календарға ярашлы, 1937 йыл, ысынлап та, башҡа йылдар кеүек үк, 1 ғинуарҙан башланғандыр, әммә Советтар Союзы тарихындағы "37-се йыл" тип аталған бөтә халыҡ фажиғәһе күптән алда, 1920-се йылдар аҙағында - 1930-сы йылдарҙың башында уҡ үҙенең ҡорбандарын йыя башлай.**

1928 йылдың 9 июлендә ВКП(б) (белмәгәндәр өсөн аңлатып үтәм - большевиктарҙың бөтә Рәсәй коммунистар партияһы) Үҙәк комитеты пленумында Иосиф Сталин үҙенең "Индустрияләштырыу һәм икмәк программаһы" тип аталған телмәрендә "социализмды төҙөү тамамланыуға барған һайын, синфи көрәштең ҡыҙҡыулашыуы" тураһындағы теорияһы менән таныштырып үтә. Йәғни, ауыл хужалығының, сауҙаның, сәнәғәттең социалистик формалары үҫешкән һайын, иҫкегә йәбешеп ятыусылар был хәл менән риза булмай, уға ҡаршы сығасаҡ. Һөҙөмтәлә социализм юлы менән алға барған һайын, капиталистик элементтарҙың ҡаршы тороуы арта ғына барасаҡ. Ә "дошман баш һалмаһа, уны юҡҡа сығарырға кәрәк", шулаймы? Тәбиғи, Сталиндың был теорияһы шунда уҡ, кисекмәҫтән, бөтә ил буйынса тормошҡа ашырыла башлай. Социалистик хужалыҡтың төп принциптарына таянып, был эш ентекле әҙерләнгән планға ярашлы ойошторола. Һәр бер төбәккә өҫтән, Үҙәктән һандар төшөрөлә - күпме кулакты асыҡларға һәм һөрөргә. Кем планды үтәмәй, шул үҙе контрреволюцион элемент, фетнәсе. Кем кулакты яҡлай, шул үҙе подкулачник. Артабан золом "тәгәрмәсе" ил буйлап тәгәрәй ҙә тәгәрәй, шәбәйгәндән шәбәйә бара.

Башҡорттарҙы был "тәгәрмәс" 20-се йылдарҙан башлап иҙә, ә 1937 йылда инде иң ауыр мәл килеп етә. Халыҡ милли етәкселәрҙе, зыялыларын, сәнғәт һәм мәҙәниәт, әҙәбиәт, дин һәм фән әһелдәрен юғалта. Ошо уҡ йылдарҙа ошо уҡ фажиғә Рәсәйҙә ғүмер иткән башҡа милләттәрҙе лә аямай. Кавказ халыҡтарын да, татарҙарҙы ла, сыуаштарҙы ла, удмурттарҙы ла, мариҙарҙы ла... "Буржуаз милләтселек"тә, "милли уклон"да, "вәлидовщина"ла ғәйепләнеп, был халыҡтарҙың зыялылар ҡатламы һөргөнгә оҙатыла, төрмәләргә бикләнә, үлем язаһына дусар ителә, юҡҡа сығарыла, "лагерь саңы"на әүерелдерелә... Халыҡтар рух һынланышы булған, милли аңды йөрөтөүсе шәхестәрен юғалта. Һынауҙар алдында аңғыҙы тороп ҡала.

Беҙгә, бөгөнгө быуынға, һуңғы йылдарҙа асылған документтарға таянып, ул ваҡыттағы ваҡиғаларға яңы күҙлектән ҡараған кешеләргә, был фажиғә алдан уйланылған һәм махсус рәүештә халыҡты ҡанһыҙландырыр, милли рухын, үҙаңын юйыр, ҡотон алыр өсөн ойошторолған дәүләт сәйәсәте икәнлеге аңлашыла. Ә бит ул ваҡытта йәшәгән кешеләрҙең күбеһе быны белмәй, аңламай, күрмәй, дәүләткә, уның етәкселәренә, улар үткәргән сәйәсәткә мөккиббән китеп ышана, үҙ өләшөн индерергә ынтыла. "Халыҡ дошман"дарын тирәяғында, коллегалары, дуҫ-иштәре, туғандары араһында эҙләй. Иң ҡурҡынысы шунда - ул уларҙы таба. Былдай болғансыҡ осорҙо үҙенең шәхси мәнфәғәттәрендә (мәҫәлән, күршенең фатиры иркенерәк, етәксенең креслоһы йомшағыраҡ һәм башҡалар) файҙаланған кешеләр ҙә табылмай түгел, табыла. Тиҙәк батмай, тиҙәр бит. Тап ана шундай кешеләр тураһында әйтелгән ул...

Быныһы баш һүҙ урынына ғына булды. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, 37-се йыл бөтән ҡабатланмаһын, тип йыл һайын, кәмендә бер тапҡыр, Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу көнөндә, намаҙ урынына ҡабат-ҡабат тәкрарлаһаҡ та, шундай уҡ ваҡиғаларҙы бөгөн яңынан кисерергә тура килә.

Шуға ла егерменсе быуаттан егерме беренсегә ҡайтайыҡ. Тарих төпкөләнән бөгөнгөгә, тимәк. "Ярты баҡсабыҙҙы юҡ иткән, балта менән ҡырып киткән" ҡанлы утыҙ етенән ике меңенсе йылдарға...

...2010 йылдың февраль башында бер уҡ көндә, бер уҡ ваҡытта Өфөлә Башҡортостан Республикаһының ҡайһы бер дәүләт учреждениелары һәм ойошмалар биналарына йөҙҙәрен битлек менән ҡаплаған ҡоралы кешеләр тентеүҙәр ойоштора, компьютерҙар, дискылар, эшлекле ҡағыҙҙарҙы тартып ала. Улай ғына ла түгел, тентеүҙәр республиканың ҡайһы бер район хакимиәттәрендә һәм бынан тыш яуаплы урындар биләгән кешеләрҙең йорттарында һәм фатирҙарында үткәрелә. Нимә эҙләйҙәр? Бына быныһы иһә аңлашылмай. Нимә табалар, шуны һыпырып алып китәләр.

Был туралағы мәғлүмәт беренселәрҙән булып ҡайҙа донъя күрә икән тип уйлайһығыҙмы? Бер нисә йыл рәттән Башҡортостан һәм башҡорт халҡына бысраҡ яуҙырған, шуға күрә суд ҡарары менән ябылған интернет-сайттың "игеҙәгендә". "Именлек хеҙмәтендәге сығанағыбыҙҙан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда..." тип башлана был хәбәр. Дәүләт именлеген һаҡлау бурысы йөкмәтелгән ойошманан мәғлүмәт бер генә ваҡытлы матбуғат сараһына ла, мәғлүмәт агентлығына ла түгел (ә ундай мәғлүмәтте ҡайһы бер гәзиттәр рәхәтләнеп файҙаланыр ине), ә ниндәйҙер шикле сайтҡа "койола". Башҡортҡа ҡаршы, республикаға ҡаршы хәрәкәт итеүсе икәнлеге бар ғаләмгә билдәле булған сайтҡа, йәғни. Ошо факттың хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ әле. Түбәндәрәк беҙ уға әйләнеп ҡайтасаҡбыҙ. Әлбиттә, бындай сайттарға хас булғанса, мәғлүмәттең 99 проценты ялған һәм уйҙырма, әммә тәүге ике-өс һөйләме (йәғни, тентеүҙәр үткәрелеүе тураһындағыһы) һуңғараҡ башҡа сығанаҡтарҙа донъя күргән мәғлүмәткә ярашлы дөрөҫ булып сыҡты.

Һуңғы йыл эсендә республика хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан башҡорт милли ойошмаларына ҡарата ысын мәғәнәһендәге "һунар" асылыуы тураһында ентекләп яҙып тормайым. "Һунарсылар" милли ойошмалар менән генә сикләнмәй. Баш ҡала һәм республикала үткәрелгән байрамдар, төрлө саралар уларҙың иғтибарынан ситтә ҡалмай. Ойоштороусылары айырым күҙәтеүгә алына. Улар артынан һәр ваҡыт кемдер йөрөй, аңдый, осрашыуҙарын, һөйләшеүҙәрен теркәп ҡуя.

Артабан органдар әүҙемләшә - башҡорт милли ойошмаларының сараларын үткәргән район хакимиәттәре биналарында тентеүҙәр ойоштора, уларҙы "әңгәмәгә" саҡыра. Һәм, ниһайәт, 2010 йылдың февраль килеп етә. "Х" ваҡыты, йәғни. Тентеүҙәр ойошмаларҙың, дәүләт ойошмаларының ниндәй енәйәтсел, экстремистик маҡсаттарын асыҡлау өсөн түгел, ә бары тик ҡурҡытыу, ҡотто алыу өсөн үткәрелгәне көн кеүек асыҡ. Кешеләрҙән экстремистик ҡараштарын һәм террористик эшмәкәрлеген дәлилләгән ниндәйҙер аныҡ документ йәки, әйтәйек, гранатометты (бомба ла булыуы мөмкин) табыу өсөн уларҙың йорттарына, фатирҙарына үҙҙәре булмағанда ишектәрен емереп баҫып инеү, өйҙөң аҫтын-өҫкә килтереү мотлаҡ түгел дә бит. Әммә был органдарҙың 37-се йылдан ҡалған "эш тәжрибәһе". Ул "тәжрибә" хаҡында китаптар уҡығаныбыҙ, кинонан ҡарағаныбыҙ бар. Бына төн уртаһында кешеләрҙең берҙән-бер һыйыныр урыны булған йортҡа яттар килеп инә. Улар итектәрен сисмәй, таҙа иҙәндәр буйлап йөрөй, китаптарҙа соҡона, түшәктәрҙе аҫтын-өҫкә әйләндерә. Шкафтарҙан балаларҙың, ҡатын-ҡыҙҙарҙың әйберҙәрен, эске кейемдәрен иҙән уртаһына сығарып ташлай. Был хәл бөгөн күршеләрҙә, иртәгә - өҫкө ҡатта, унан һуң - аҫтараҡ. Кеше төндәрен йоҡлай алмай, уларҙың килеүен көтә. Борсола. Бер ғәйебе лә юҡлығын белә. Әммә бит күрше лә аҡ, саф һәм пак кеүек ине. Алып киттеләр. Шулайтып, тотош ил шомға сума. Халыҡ бер-береһенән генә түгел, үҙенән-үҙе шикләнә башлай. Һәр мөйөштә уға дошмандар күренә. Милләт ҡайғыһымы ни бында? Ғүмерҙе һаҡлап ҡалырға ине. Беҙҙе бөгөн дә ошондай уҡ хәлгә ҡалдырмаҡсылар. Өндәшмәһәк, шым ҡалһаҡ, көтөп ятһаҡ, тиҙҙән улар төндәрен беҙҙең өйҙәребеҙгә лә килә башлаясаҡ.

Беҙ тәүгеләр тип уйлайһығыҙмы? Беҙҙән башланылар, тип хис итәһегеҙме? Юҡ, йәмәғәт, яңылышаһығыҙ. Беҙгә тиклем улар мари халҡын тапай. 2005 йылда башлана мари милли ойошмалары өсөн "ҡара көндәр". Бөтәһе өсөн дә түгел, халыҡтың телен, мәҙәниәтен, рухын һаҡлап алып ҡалырға тип тырышып йөрөгәндәре өсөн. 1917 йылда Өфөлә ойошторолған, 90-сы йылдар башында ҡабаттан тергеҙелгән "Мари ушем" ойошмаһы етәкселәренә ҡаршы "һунар" ойоштороla. Уларҙы эштәренән китергә мәжбүр итәләр, ойошма биләгән бүлмәне мисәтләп ҡуялар, уларға урындағы ваҡытлы матбуғат сараларын һөсләтәләр. Гәзиттәр мәғлүмәтте ҡайҙан алған, тип уйлайһығыҙмы? Махсус рәүештә Интернетта ойошторолған сайттан. Әлеге ваҡытта был сайт эшләмәй, әммә мариҙар уны бик яҡшы хәтерләй. Унда уларҙы нисек кенә атамағандар ҙа, улар хаҡында ни тип кенә әйтмәгәндәр. Тап ошо осорҙа Мари Элда сит ил шпиондарын эҙләй башлайҙар. Финляндия йәки Эстония файҙаһына эшләгәндәрен, мәҫәлән. Унда шулай уҡ сит ил махсус хеҙмәттәренең (әйтәйек, ЦРУ) агенттары табыла. Рәсәйҙе тарҡатыу һәм "Бөйөк фин-уғыр дәүләте" булдырыу маҡсатында ойошторолған халыҡ-ара заговор хаҡында билдәле була. Был һаташыу түгел. Мариҙар быны кисергәндәр инде. Сират беҙгә килеп етте, буғай.

Ә иң ҡыҙығы шунда. Тап ошо осорҙа Мари Эл Республикаһы буйынса Федераль именлек хеҙмәте менән полковник Виктор Палагин идара иткән була. Яңылышаһың, тиерһегеҙ, ул бит... Дөрөҫ, 2009 йылдың ғинуарында Башҡортостанға ул генерал-майор булып килә. Бында юғары званиены буштан-бушҡа бирмәгәндәрен аңлайһығыҙҙыр, йәмәғәт. Беҙҙән ниндәй дәрәжәлә китер икән? Үҙебеҙҙән тора.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы "2012 йылға тиклем ауылдың социаль үҫеше" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә сараларҙы бергәләп финанслау өсөн федераль бюджеттан субсидия аласаҡ. Бүленәсәк 174 млн һум аҡса ауыл ерендә йәшәүсе йәш ғаиләләрҙең, белгестәрҙең торлаҡ мәсьәләһен хәл итеүҙе финанслау өсөн тотоноласаҡ.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев социаль пособие алыуҙы көйләү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Иң әүәл биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләүсе ғаиләләргә торлаҡ сертификаты алыу мөмкинлеге кинәйтелеүен билдәләп үтергә кәрәк: хәҙер ошондай сертификат менән ҡулланыу хоҡуғы ошо ғаиләлә балиғ булып, үҙ ғаиләләрен ҡорғандарға ла биреләсәк.

✓Торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәте өсөн түләүҙәргә субсидиялар алыусы аҡсалата компенсацияға һәм уның күләмен йөгөнтө яһауҫы үҙгәрештәр була ҡалһа (мәҫәлән, эш хаҡы күтәрелһә), 10 көн эсендә ошо турала мотлаҡ хәбәр итергә тейеш. Үҙәк телевидение тапшырыуҙарын ҡарап барғандар бында ниндәй хәүеф ятҡанлығын беләләр: Златоуст ҡалаһы прокуратураһы балалар пособиеһы алыусы бер нисә әсәгә ҡарата енәйәт эше асҡан. Баҡтиһән, улар эш хаҡы күтәрелеүе хаҡында хәбәр итмәйенсә, пособие алыуҙы дауам иткән. Тейешле документтар тулыһынса булмау, субсидия бирелеү шарттары (фатир өсөн түләү эш хаҡығыҙҙың 22 процентынан кәмерәк булһа) тура килмәү, коммуналь хеҙмәттәр өсөн башҡа программалар буйынса ярҙам алыу осраҡтарында субсидия бирелмәйәсәк. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, ауыр тормош шарттарына дусар булғандар йылына бер тапҡыр матди ярҙам алыу хоҡуғына эйә.

✓"Сәләмәтлек" милли проектын тормошҡа ашырыуҙың тағы бер һөҙөмтәһе - һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә йәш белгестәр күпләп килә башланы. Быға, күрәһең, врачтарҙың эш хаҡы артыуы, учреждениеларҙы заманса ҡорамалдар һәм аппаратуралар менән йыһазландырыу ҙа булышлыҡ иткәндер. Беренсел звенолағы врачтарҙың һәм медсестраларҙың эш хаҡы 2005 йылғы менән сағыштырғанда өс тапҡырға артҡан һәм хәҙер 24,7 һәм 13,8 мең һум тәшкил итә. Бынан тыш, 2400 фельдшер-акушерлыҡ пункты хеҙмәткәре һәм 2072 тиҙ медицина ярҙамы хеҙмәткәре өҫтәмә түләүҙәр ала.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МӘСКӘҮГӘ ЛӘ...

## өлгө күрһәтәбеҙ

**Өфөгә Рәсәй Хөкүмәте делегацияһы составында килгән Мәскәү мэры Юрий Лужков та "Башҡортостандың социаль картаһы" проекты менән ныҡлап ҡыҙыҡһынды. Ул иһә баш ҡалабыҙҙың 1-се дауахананында булды.**

-Хәҙер регистратура тәҙрәһе янында ла, табип кабинеты ишеге төбөндә лә ғәҙәти күренеш булған оҙон сираттар юҡҡа сыҡты, - тип һөйләне дауахананың баш табибы Руслан Солтанов, - сөнки ауырыуҙар табипҡа тәғәйен көнө-сәғәтенә алдан яҙыла. Тағы ла шуныһы: невропатолог, кардиолог, окулист, аллерголог, онколог һәм башҡа шуның кеүек айырым белгестәргә эләгеүе һәр саҡ ҡыйынлыҡ тыуҙыра ине, - тип дауам итте һүҙен баш табип. - Әле электрон теркәү яҙҙамында алдан яҙылырға йә булмаһа башҡа дауахана табиптарына мөрәжәғәт итеү мөмкинлеге тыуҙы. Әйткәндәй, табипҡа интернет аша ла, телефондан да, теркәү бүлегендә лә ике аҙна алдан яҙылырға була.

Берҙәм электрон теркәү, шулай итеп, проект сиктәрендәге берҙәм мәғлүмәт системаһының төүге блогын тәшкил итһә, икенсе этабы медицина хеҙмәте күрһәтеүҙең автоматлаштырылған персональ иҫәбен алып барыу мөмкинлеге бирә. Өсөнсө блок льготалар менән файҙаланыусы ауырыуҙарҙы һәм инвалидтарҙың иҫәбен алып барыу, уларҙы кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеү программаһы буйынса дарыуҙар яҙҙырыуҙы һәм алыуҙы теркәү, иҫәпкә алыу мөмкинлеге бирә.

Мәскәү ҡунағы Юрий Лужков 1-се ҡала дауахананының яңы система буйынса эшмәкәрлеген бөтә этаптарҙа ла ҡарап сыҡты. Ауырыуҙарҙы теркәү бүлегенән һуң Ю. Лужков һәм уны оҙатып йөрөүсе Өфө ҡалаһы мэры Павел Качкаев, уның урынбаҫары Әлфирә Баҡыева, баш табип Руслан Солтанов дауахананың икенсе ҡатына күтәрелеп, 3-сө участка терапевы Линара Ҡоломбәтованың эш кабинетында ауырыуҙарҙы яңы система буйынса ҡабул итеү ысулын ҡараны.

-Хәҙер электрон талон тултырыуға ни бары бер-ике минут ваҡыт китә, ә ҡағыҙ тултырыуға элек алты минут самаһы сарыф ителә ине, - тип һөйләне Л. Ҡоломбәтова. - Ауырыуға күберәк иғтибар бирергә лә форсат тыуҙы. Кәрәк икән, ауырыуҙы амбулатор күҙәтеүгә алырға, шулай уҡ лабораторияның мәғлүмәттәр базаһына сығып, анализ һөҙөмтәләре менән оператив танышырға була.

Артабан "Башҡортостандың социаль картаһы"ның медицина ҡушымтаһы буйынса фекер алышыу электрон экран янында дауам итте. Баш табип Р. Солтанов берҙәм мәғлүмәт системаһына ҡуҫҡан Тиҙ ярҙам ҡала станцияһының яңы эш тәжрибәһе тураһында ла һөйләне. Яныраҡ ҡына 110 "Ашығыс ярҙам" машинаһы махсус навигация системаһы менән йыһазландырылған. Был һәр машинаға эш мәлендә иң һөҙөмтәле, унайлы һәм ҡыҫҡа маршрут булдырыуға булышлыҡ итә.

Ҡыҫҡаһы, "Башҡортостандың социаль картаһы" проекты илдә тәүге тәжрибә тәртибендә Башҡортостандың тиҫтәгә яҡын ҡала һәм райондарында һынау тота. Ул артабан да яңы мәғлүмәттәр банкы менән тулыландырыласаҡ һәм камиллаштырыласаҡ. Иң мөһиме - заман яңылығы республикабыҙҙың үҫеш потенциалын раҫлаусы мөһим бер башланғысҡа нигеҙ һалыуы менән ҡиммәтле.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Заманында СССР-ҙа етештерелгән иң яҡшы тауарҙар "Сифат билдәһе" тигән махсус тамга менән сығарыла торғайны. Хәҙерге Рәсәйҙә ундай билдә юҡ, әммә көндәлек ҡулланылышҡа сығарыла торған тауарҙарҙың сифаты сертификация процедураһы аша тикшереүгә дусар ителде. Әлбиттә, беҙҙә баҙарҙа йәки супермаркеттарҙа аҙыҡ-түлек йәки башҡа төрлө тауар һатып алыусының һатыусынан сертификат-фәлән талап итеүен күргән кеше һирәктер. Рәсәйле үҙ танауына ныҡыраҡ ышана: аҙыҡ-түлек төрөлгән пакеттарҙы еҫкәп ҡараусыларҙы йышыраҡ осратып була.**

# СИФАТТЫМЫ?

## Танауың менән билдәлә

Әллә шуға, әллә башҡа бер сәбәп менәнме, Рәсәйҙә 15 февралдән алып байтаҡ ҡына тауарҙарҙың сертификатлы булыуы мотлаҡ түгел, тип табылды - сифат яғынан мотлаҡ тикшерелергә тейешле тауарҙар исемлегенән аҙыҡ-түлек төрҙәре, парфюмерия һәм косметикаға ҡарағандары алып ташланды. Шарап, коньяк, араҡы тураһында һөйләп тормаһаҡ та була, сөнки улары барыбер башҡорт ризығы түгел. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа үпкәләмәһен: тушь тигәндәре ямғыр ҡуҙе тейер-теймәҫтән аға башлаһа ла, әллә ни артыҡ зыян булмаҫ һымаҡ. Сифатһыҙ шампундан сәс ҡойола башлаһа, ундайын башҡаса алмаҫҡа ла була. Заманында таҡта сәйгә (исеме есеменә тура килеүен әйт әле) лә бик шәп ҡулайлашҡан ашҡаҙан-эсәктәребеҙ бөгөн сәй һәм ҡәһүәнең иң заттыларын да, онтаҡҡа әйләнделгәндәрен дә берҙәй ҡабул итә. Тырышҡанда, затлы минераль һыуҙарыбыҙ менән бөтә Европаны күмә алыр инек. Күп тауарҙарыбыҙға "Made in Bachkortostan", тип яҙыу ҙа етер ине. Әммә бөгөн өҫтәлдәребеҙгә ҡуйылған барса ризыҡтың да ҡайҙан килтерелгәнен, иң мөһиме, нисек эшкәртелгәнен һәм һаҡланғанын аныҡ ҡына бер кем дә әйтә алмаҫ.

Шулай булғас, колбаса, ит аҙыҡтары, балыҡ, консервалар, ҡамыр-кондитер аҙыҡтарының сифатын махсус дәүләт органдары бөтөнләйгә тикшермәй башлаһа, көнөбөҙ сифаты бәҙрәф ҡағыҙына (эмалле һауыт-һаба, ҡағыҙ таҫтамалдар, өҫтәл ябыуҙары, ҡульяулыҡ, бәҙрәф ҡағыҙы - сертификатлы тауарҙар иҫәбендә) ҡалмаҫ, тимәгеҙ. Бәлки, бынының ла түҙергә мөмкин булыр ине, әммә нисек итеп балалар ризығының сифатын тикшермәйенсә, һатыуға сығарып була икән? Әлеге исемлектән балалар аҙығы әҙерләү өсөн ҡулланылған он, ҡоро ҡатнашмалар, бутҡалар, емеш-еләктән, ит һәм балыҡ ҡулланылып әҙерләнгән аҙыҡтар, ҡош ите консервалары, хатта имсәк балалар өсөн тәғәйенләнгән йәшелсә консервалары һыҙып ташланған! Йәнәһе, хәҙер бөтә яуаплылыҡ тауар етештереүсе өҫтөнә һалынасаҡ. Әммә Рәсәй халҡы тарафынан төҙөлгән өс бәлә тураһындағы исемлекте ҡыҫҡартыу иртәрәк түгелме һуң: яуапһыҙлыҡ һәм ҡомһоҙлоҡ хөкөм һөргәндә, юлдарҙы тә бөтмәйәсәк бит. Әлеге лә баяғы, бар ышанысыбыҙ тынғыһыҙ баш санитарыбыҙ Геннадий Онищенкоға һәм, әлбиттә, һиҙгер танауҙарыбыҙға ғына ҡала инде, хөрмәтле йәмәғәт.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

# ИНСПЕКТОРҘАР...

## ҡыуаҡлыҡтан сыға



**РФ Эске эштәр министрлығы юл-патруль хеҙмәте эше буйынса административ регламентҡа үҙгәрештәр индерҙе.**

Яңы ҡағиҙәләр буйынса, юл хәрәкәтен күҙәткән мәлдә ЮХХДИ автомобиле водителдәргә күренеп торорға тейеш. Министрлыҡтың юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге департаменты башлығы Виктор Кирьянов белдереүенсә, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең төп бурысы енәйәтселәрҙе тотоу түгел, ә тәртип боҙоуға юл ҡуймау. Тәүлектең ҡараңғы мәлендә, сикләнгән күренеүсәнлек шарттарында ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре юлдың яҡтыртылған урындарында торорға һәм уның үҙе менән яҡтырып торған милиция таяғы, яҡтылыҡ сағылдырғыс ҡоролмаһы булырға тейеш. Был мотлаҡ талап инспекторҙарҙың хәүефһеҙлеге өсөн ҡуйыла.

ЮХХДИ хеҙмәткәре юл хәүефһеҙлеген һаҡлаған саҡта фото йәки видео саралары ҡуллана икән, водителдәргә күренмәһә лә була, тик был тәбиғи бороloштар йәки урам-юл селтәре ҡоролмалары ышыҡлаған урындарға ғына ҡағыла. Әгәр ҙә бындай ҡоролмалар машинаның багажнигында урынлашһа һәм ул автоматик режимда эшләһә, гаи инспекторы машинаның багажнигын асып ҡуя ала.

Әгәр ҙә юлды контролдә тотоу махсус буяуһыҙ патруль машинаһында алып барыла икән, инспектор ҡағиҙәне боҙоусы водителде туҡтата алмай. Элек был пункт юл хәүефһеҙлеге хеҙмәте буйынса күрһәтмәлә булһа ла, регламентта юҡ ине, хәҙер уны дөйөм ҡулланылышҡа индерҙеләр. Тимәк, бындай контроль ваҡытында наряд йә юл-патруль хеҙмәте посы, йә махсус буяулы автомобилдәрҙә эшләүсе наряд менән бергә эшләргә тейеш була. Тик улар ғына тәртип боҙоусыны туҡтатып, административ хоҡуҡ боҙоу тураһында документ тултыра ала.

Регламенттың прокуратура, суд хеҙмәткәрҙәре, прокуратураның тикшереү комитеты тәфтишсеһе водителдәренә ҡағылған өлөшө лә үҙгәрештәр кисерҙе. Хәҙер ЮХХДИ инспекторы уларға ҡарата протокол тултыра һәм башҡа ваҡ-төйәк өсөн борсой алмай, ә дежур хеҙмәткәргә хәбәр итә һәм үҙенең етәкселегенә рапорт төҙөй. Бындай водителдәр спиртлы эсемлек эскән икән, автоинспектор уның артабан юлды дауам итеүенә юл ҡуймаҫҡа тейеш.

Былараҙан тыш, яңы документта сит ил граждандарына ҡағылышлы мәсьәләләр асығыраҡ яҙылған. Мәҫәлән, юл-патруль хеҙмәте транспорт сараһын ориентировка нигеҙендә генә тикшерә ала. Тентеү булараҡ ҡабул ителгән талаптар, мәҫәлән, капотты йәки багажникты астырып ҡарау рөхсәт ителмәй.

# Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына әҙерлек саралары тураһындағы мәғлүмәт менән сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, 8-9 майҙа Еңеү, Ленин исемендәге майҙандарҙа сәскәләр һалыу, офицерҙар, һалдаттар, курсанттар һәм хәрби техника парады, театрлаштырылған тамаша, концерттар буласаҡ.

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Альбина Йосопова журналистар менән матбуғат конференцияһында Өфөнөң халыҡ хужалығы тармаҡтары эш һөҙөмтәләре менән таныштырҙы.

✓ "Баш ҡала уҡытыусыһы - 2010" конкурсына йомғаҡ яһалды. 80-се мәктәптән Зөлфиә Ҡаһарманова - "Иң яҡшы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" , 105-се гимназиянан Владимир Раевский - "Иң яҡшы рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы", 65-се гимназиянан Ләйсән Насирова "Иң яҡшы татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" исемдәренә лайыҡ булды. "Баш ҡала уҡытыусыһы -2010" конкурсының төп еңеүсеһе - 3-сө гимназияның математика уҡытыусыһы Елена Фролова.

✓Баш ҡаланың мәғлүмәт-аналитика тармағының 2009 йылдағы эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһалды. Был тармаҡ үҙ эсенә баш ҡала райондары хакимиәттәре эргәһендәге мәғлүмәт-аналитика бүлектәрен, бынан тыш, ойошмалар, учреждение һәм предприятиелар эргәһендәге йәмәғәтселек менән эшләү төркөмдәрен, ҡала гәзиттәре редакцияларын үҙ эсенә ала. Мәғлүмәт заманында йәшәүебеҙҙе, халыҡтың 70-80 процентының барыбер ҙә гәзит һәм башҡа сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәткә ышаныс белдереүен иҫәпкә алғанда, баш ҡаланың мәғлүмәт-аналитика хеҙмәтенең әүҙемлеге лә, ишле булыуы ла үҙен аҡлай.

**✓25 февралдә 19.00 сәғәттә "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайында башҡорт йәштәре өсөн эскелеккә ҡаршы ток-шоу үтә. Унда Әбйәлил районы Байым ауылында төшөрөлгән "Геноцид ҡоралы" эскелеккә ҡаршы аналитик фильмдың презентацияһы буласаҡ. Сарала баш ҡалабыҙ шәхестәре, шулай уҡ Силәбе, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан һәм Әбйәлил районынан килгән ҡунаҡтарҙың сығышы көтөлә.**

*АПТЫРАРЛЫҠ!*

# ҠОТҠОСОҒА ҠУШ КҮРЕНӘМЕ,

## йәки Башҡортостанда экстремизм күлдәген кем тегә?




**Ошо аҙнала Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитетының сираттағы ултырышы уҙғарылды. Башҡарма комитет ағзалары иғтибарына республика ҡалалары һәм районларында III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау, халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен, ижтимағи һәм рухи хәлен сағылдырған баҫмалар сығарыу, иң оло йыйынбыҙға әҙерләнеү буйынса башҡа мәсьәләләр сығарылды. Ултырышта шулай уҡ һуңғы көндәрҙә Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы, башҡа хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан башҡорт йәмәғәт ойошмалары етәкселегенә асыҡтан-асыҡ баҫым яһалыуы сәбәптәре хаҡында фекер алышыу булды.**

Башҡорт йәштәренең йәмәғәт ойошмаларына бер ниндәй нигеҙһеҙ экстремист ярлығын тағырға тырышыусылар тураһында әлегерәк тә белә инек. Бына ошондай баҫым көсәйеп, ҡайһы бер дәүләт учреждениелары етәкселәрен шик аҫтына алып, тентеүҙәр уҙғарыла башлағас, Башҡорт йәштәре иттифағы үҙенең сайтында ошо сәйәсәт менән риза булмауы һәм законлы нигеҙҙә ҡаршылыҡ күрһәтәсәге хаҡында белдереү яһаны.

Республикабыҙҙа "башҡорт экстремистары" бармы һуң? Аңы теүәл булған һәр кем был һорауға: "Элек тә булманы, хәҙер ҙә юҡ", - тип әйтәсәк. Ғөмүмән, башҡорт йәмәғәт ойошмаларының Башҡортостанда милләт-ара килешеп йәшәү сәйәсәтенә булышлыҡ итеү юлынан тайпылғаны юҡ. Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты ағзалары килеп тыуған хәлгә етди борсолоу белдереп, республикабыҙҙа яһалма рәүештә сәйәси тотороҡһоҙлоҡ булдырыуға ҡаршы сыҡты. Башҡарма комитет Башҡорт йәштәре иттифағы позицияһын яҡлап, тотороҡһоҙлоҡҡа илтеүсе хаталы аҙымдарға ҡаршы сығып, айырым белдереү яһаясағы хаҡында ҡарар ҡабул итте.

Эйе, башҡорт халҡы борон-борондан ихлас, ҡунаҡсыл, башҡа ҡәүемдәргә ҡарата үтә игелекле булған, һәм ошо тарихи традиция бөгөн дә дауам итә. Әлбиттә, йәшәйешебеҙҙә аңлашмаусанлыҡ осраҡтары, айырым конфликттар ҙа булыуы мөмкин, әммә улар барыһы ла законлы рәүештә хәл ителергә тейеш. Тыныс һәм айыҡ аҡыл менән алып барылған тормошобоҙҙо бутау, ватансыл башҡорттан "ҡурҡылыҡ" яһау кемгә кәрәк һуң? Башҡортостанда тыуып үҫеп, Рәсәй армияһында өлгөлө хеҙмәт иткән егеттәребеҙ менән хаҡлы ғорурланабыҙ: Рәсәй оборона министры ошондай ватансыл тәрбиә алып барылған өсөн республика етәкселегенә бер генә тапҡыр рәхмәт белдермәне бит. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, заманында Афғанстанда, һуңынан Чечен Республикаһында һалдат бурысын үтәгәндә йөҙәрләгән яҡташтарыбыҙ һәләк булды. Яңы ғына Өфөгә Төбәктәр үҫеше комиссияһының күсмә ултырышында ҡатнашыу өсөн килгән В. В. Путин иң әүәл бындағы хәрби часҡа килеп, Чечня ерендә һәләк булған йәш егеттәребеҙҙең яҡты иҫтәлегенә баш эйҙе. Экстремистар йәшәгән төбәктә бының булыуы мөмкин инеме һуң?

Башҡорт экстремистары юҡ беҙҙә, әммә "Уфагубъ" кеүек суд ҡарары менән тыйылып та, үҙенең ҡара эшен - тотош милләтте, уның халыҡ-ара танылыу тапҡан шәхестәрен мыҫҡыллап, төрлө ялған һәм яла яғыусы мәғлүмәттәрен таратыуҙы дауам итеүселәрҙе хоҡуҡ һаҡлау органдары ни өсөн күрмәмеш тә белмәмеш? Ошо әтрәгәләмдәрҙең башҡорт халҡына ҡарата асыҡтан-асыҡ нәфрәт менән һуғарылған уйҙырмалары, төрлө мөрәжәғәттәре, ялған тулы мәҡәлә ишараттары милләт-ара ыҙғыш тыуҙырыуға йүнәлтелгәнен мәктәп уҡыусыһы ла аңлай ала. Тап шул әҙәмдәрҙең шовинизм менән тулы экстремизм юлында булыуын раҫлау өсөн белгес-эксперттарҙан аңлатма яҙҙырыу ҙа кәрәкмәй. Быны күрәләтә ысын экстремизмға юл ҡуйыу, тип нарыҡлау раҫ. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй Конституцияһы гарантиялаған милли хоҡуҡтарын, туған телен, милли мәҙәниәтен һәм мәғарифын, республикабыҙҙың дәүләтселек статусын яҡлап сығыш яһаусыларға нисек итеп "экстремист" мөһөрөн баҫырға мөмкин?

Урыҫ телендә "провокация" тигән бик кире мәғәнәләге төшөнсә бар. Халыҡ хәтерендә провокатор Азефтың, поп Гапондың исемдәре әле лә онотолмаған, сөнки уларҙың ҡара эштәре һөҙөмтәһендә бер ғәйепһеҙ кешеләрҙең яҙмыштары емерелгән, байтағы һәләк булған. Башҡортса әйткәндә, был төрлө ялған һәм уйҙырма ҡулланып, ҡотҡо таратып, кешеләр күңелен ҡуҙғытыу, уларҙа ризаһыҙлыҡ һәм нәфрәт уятып, ҡыҙған баштан закон сиктәрен уҙып китеүгә дусар итеү була. Беҙ һүҙ алып барған саралар ошондай маҡсатта ойошторолмайҙыр, тип әйтеп булмай. Ҡотҡоноң ҡойроғо оҙон булһа ла, ваҡыты бик самалы. Мәкерле әҙәм үҙе ҡорған ҡапҡанға үҙе ҡабыусан була. Унан һуң, һәр ялған ҡасан да булһа фашланасаҡ. Әкиәттәге баланың да: "Король шәрә бит!" - тип ҡысҡырыуы бөгөнгө ситуацияға тап килеп торғандай.

Шуның өсөн үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлау кәрәк булғанда бар ғәмәлдәребеҙҙең айыҡ аҡыл һәм закон нигеҙендә башҡарылыуы мотлаҡ. Халыҡ-ара хоҡуҡ нормалары, Рәсәй һәм Башҡортостан Конституцияларының айырым кеше һәм тотош милләт өсөн ҡеүәтле ҡалҡан булыуын онотмайыҡ.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# ПЕНСИЯҢДЫ ИҪӘПЛӘ

**Яңыраҡ пенсия килтерҙеләр. Күршеләрем дә минең кеүек үк пенсионерҙар, йәшебеҙ ҙә, стаждарыбыҙ ҙа бер төрлө, тип әйтерлек, ә бына пенсияға өҫтәмә төрлөсә килеп сыҡты. Валоризация өҫтәмәһен нисек үҙ аллы иҫәпләп сығарырға?**

Иң тәүҙә шуны билдәләп китәйек: валоризацияла пенсия реформаһы башланыу хаҡында иғлан ителгән 2002 йылдың 1 ғинуарына тиклем хеҙмәт стажы булған бөтә граждандар ҙа ҡатнаша. Шул уҡ ваҡытта 2002 йылға тиклем күпме - бишме, әллә утыҙ биш йыл эшләгәнме кеше - уныһы мөһим түгел. Кемдәрҙең эш биреүсеһе ваҡытында Пенсия фондына аҡса бүлгән, шуларҙың бөтәһенә лә пенсияһының страховка өлөшөнә 10 процент күләмендә өҫтәмә ҡаралған. Был өҫтәмә уларға айлыҡ пенсияға ҡушып түләнәсәк. Ә эшләп йөрөүсе граждандарға тупланманың страховка өлөшө 10 процентҡа арттырылды. Тағы ла пенсияның страховка өлөшөнә 1991 йылға тиклемге совет осоро хеҙмәт стажының һәр йылына 1-әр процент өҫтәлә.

**Өҫтәмә ниңә төрлөсә?**

Өҫтәмә 2009 йылдың декабрь айы пенсияһы күләменән сығып иҫәпләнә. Өҫтәмә күләменең төрлө суммала булыуы һәр кемдең пенсияһының нигеҙ өлөшөнә бәйле, ә ул һәр кемдең төрлөсә.

**Нисек иҫәпләргә?**

Әйтеп китеүебеҙсә, өҫтәмә 2009 йылдың декабрь айы пенсияһынан сығып иҫәпләнә. Мәҫәлән, һеҙҙең ул ай өсөн 7 мең һум булды, ти.

**1-се аҙым.** Страховка өлөшөн иҫәпләйбеҙ. Страховка өлөшө 7000-2562 (күпселек пенсионерҙарҙың нигеҙ өлөшө) = 4438 һум.

**Нигеҙ өлөшө тағы ла күпме була:**

- Йәше буйынса (ә ундайҙар күпселек) пенсионерҙарҙың һәм II төркөм инвалидтарҙың 2562 һум.
- I төркөм инвалидлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһы һәм ҡараусыһын юғалтыу осрағы буйынса хеҙмәт пенсияһы өсөн - 1281 һум.

**2-се аҙым.** Хәҙер инде өҫтәмәне проценттарҙа иҫәпләп сығарайыҡ. Ул 1991 йылға тиклемге хеҙмәт стажына бәйле. Процент ике төр мәғлүмәттән хасил:

Валоризация тейешле булған (2002 йылдың 1 ғинуарына тиклем хеҙмәт стажы булған граждандар) бөтә кешегә лә 10 процент өҫтәлә. Ә инде 1991 йылға тиклем эшләгән кешеләр өҫтәмә рәүештә шул осор стажының һәр йылы өсөн 1-әр процент ала.

**Мәҫәлән:**

Һеҙҙең эш стажы - 35 йыл икән, ти. Шуның 25 йылын 1991 йылға тиклем эшләгәнһегеҙ. Тимәк, һеҙгә өҫтәмә түбәндәгесә була: 10 % (бөтәһе өсөн дә дөйөм өҫтәмә) + 25% (1991 йылға тиклемге 25 йылдың һәр йылына - 1-әр процент)

**3-сө аҙым.** Валоризациянан өҫтәмә = страховка өлөшө х өҫтәмә күләме.

Әлеге миҫалда был: 4438 һум х 35% = 1553 һум.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

**Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы**

# ИММУН СИСТЕМАҢ НЫҒЫҺЫН, ТИҺӘҢ...

## дарыу урынына үлән эс



**Иммунитет - ул организмда йоғошло ауырыуҙарға һәм ҡайһы бер ағыуланыуҙарға тыумыштан булған йәки барлыҡҡа килгән бирешмәүсәнлек. Ошо бирешмәүсәнлек түбәнәйһә йәки көсһөҙләнһә, организм төрлө сирҙәргә ҡаршы тора алмай башлай.**

Иммунитет етешмәү тыумыштан, йәғни ниндәйҙер генетик тайпылыштарға бәйле була ала. Әммә ул йышыраҡ төрлө сирҙәр кисереү, ҡайһы бер медицина препараттары ҡулланыу, һ.б. һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүсән. Иммун системаһын түбәндәге факторҙар ҙа ҡаҡшата:

❖ насар ғәҙәттәр менән дуҫ булыу - тәмәке тартыу, алкоголле эсемлектәр эсеү, туйғансы йоҡламау;

❖ дөрөҫ туҡланмау;

❖ ауыр физик һәм аҡыл көсөргәнеше;

❖ тәбиғәттең, һауаның, эсәр һыуҙың бысраҡ булыуы;

❖ организмды көсһөҙләндереүсе һәм иммун системаһын ҡаҡшатыусы бактериаль һәм вируслы сирҙәр менән йыш ауырыу.

Һөҙөмтәлә, йылына 4-6 тапҡыр һалҡын тейҙереп ауырыйбыҙ, хроник сирҙәр ҡалҡып сыға, тиҙ арыйбыҙ, хәлһеҙлек йонсота, аллергик ауырыуҙар барлыҡҡа килә.

Йылдан-йыл иммунитетҡа кире йоғонто яһаусы тәьҫирҙәр йыйыла бара һәм ул күҙәнәктәрҙә барған патологик үҙгәрештәрҙе ваҡытында юҡ итергә өлгөрмәй башлай. Шуға ла организмдың һаҡланыу көсөн нығытыу һәм иммун системаһын нормаль хәленә ҡайтарыу өсөн профилактик саралар комплексы үтеп тороу мөһим. Бөгөн дауаханаларҙа иммунитетты нығытыусы төрлө дарыуҙар һатылһа ла, уларҙың күбеһенең составына халыҡ медицинаһында киң ҡулланылған дарыу үләндәре ингән. Шуға ла дарыу урынына үләндәр эсеп алыу яҡшыраҡ. Мәҫәлән, бер ай дауамында көн һайын 5-6 грек сәтләүеге ашарға мөмкин.

**(Дауамы бар).**

*✓ Ярышта Данханды халҡы, иле гел янында тороп хуплаған, ә Мәрханды үҙ халҡы битарафлығы менән еңелеүгә дусар иткән. Башҡортостаныбыҙ Мәрхан хәленә ҡалмаһын, үҙебеҙҙе үҙебеҙ күтәрәйек, батыр яһайыҡ.*






## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Кейенеү ҡағиҙәләре

● Кейенеү мәсьәләһендә бик иғтибарлы булығыҙ. Кейем кейеүҙең маҡсаты - һалҡын һәм эҫенән һаҡланыу, халыҡҡа күркәм булып күренеү. Шуның өсөн ошо талаптарға тура килтереп кейенегеҙ, кейем өсөн артыҡ байлыҡ исраф итмәгеҙ.

● Кейемдәрегеҙҙе һаҡлап, таҙа кейегеҙ, тир еҫе сыҡмаһын өсөн күлдәк һәм ыштандарығыҙҙы алмаштырып тороғоҙ. Халыҡҡа күркәм булып күренегеҙ. Сөнки өҫ-башығыҙ тәрбиәһеҙ булһа, халыҡ һеҙҙе ялҡау һәм бысраҡ тип хөкөм итәсәк. Шулай уҡ төктәрҙе тәндә йөрөтмәгеҙ. Ләкин сәс һәм мыйығығыҙҙы матурлап ғүмер үткәрмәгеҙ. Юғарылағы тәртиптәрҙе үтәү - аҡыллы булыуҙы күрһәтә.

● Ҡиммәтле, күренеүгә ябай, оҙаҡ туҙмай торған кейемдәр һайлағыҙ. Матур төҫлө, тиҙ туҙған кейемде һайлау донъяла йәшәй белмәүҙе белдерә.

● Хәлегеҙгә лайыҡ булмаған, дәрәжәгеҙгә тура килмәгән һәм ваҡытына ярамаған кейемдәр киймәгеҙ.

● Мода тураһында һөйләмәгеҙ, моданы ишетмәгеҙ, мода менән белеш булмағыҙ. Мода - иҫерткес һәм отошло уйындар кеүек, уға эләккән кеше һәләк булмайынса туҡтай алмай.

● Кейемдәр алғанда әйберҙәрҙең хаҡын иҫәпләп ҡарағыҙ, ҡайһыныһы арзан булһа, шуныһын һайлағыҙ.

● Шәриғәт рөхсәт иткән биҙәнгестәрҙән зарар булмаһа ла, кейемдәрегеҙгә хушбый һөртөп йөрөмәгеҙ. Тәнегеҙҙе, кейемегеҙҙе таҙа йөрөтөргә ғәҙәтләнегеҙ.

● Кейем кейеү мәсьәләһендә үҙегеҙгә иш булмаған кешеләргә һайыҫҡан кеүек эйәрмәгеҙ.

● Кейемегеҙ менән маҡтанмағыҙ. Башҡаларҙың кейемдәренә мәсхәрәләп ҡарамағыҙ. Халыҡ алдында кейемдәрегеҙгә ҡарап тормағыҙ. Күңеле кәбәк менән тулы кешенең тышы ебәк булыуында бер мәғәнә лә юҡ икәнен һис бер ваҡытта ла онотмағыҙ.

● Ныҡ ҡыҫҡан һәм ныҡ иркен кейемдәрҙе киймәгеҙ. Башты эҫенән, аяҡты һыуыҡтан һаҡлай торған кейемдәрҙе һайлағыҙ.

### Һөйләшеү ҡағиҙәләре

● Һөйләшкәндә артыҡ ҡысҡырмағыҙ, артыҡ әкрен дә һөйләшмәгеҙ. Тештәрегеҙҙе ҡыҫмағыҙ. Матур, ҡыҫҡа һәм асыҡ һөйләгеҙ.

● Телегеҙ менән ирендәрегеҙҙе яламағыҙ, тештәрегеҙ менән артыҡ тырнаҡтарығыҙҙы тешләмәгеҙ. Былай итеү әҙәпһеҙлек була.

● Тел - әҙәм балаһының күңелендә булған асыу, хөрмәт, ҡатылыҡ кеүек нәмәләрҙе асып биреүсе, ғилем, әҙәп, мәғрифәт кеүек әйберҙәрҙе күрһәтеүсе ағза. Шуның өсөн телегеҙҙе башҡа нәмә өсөн ҡулланмағыҙ. Әҙәпһеҙ һүҙҙәр һөйләмәгеҙ. Инсандың сәләмәтлеген теле һаҡлаусы икәнен онотмағыҙ.

● Арттырып һөйләмәгеҙ, ғәйбәт итмәгеҙ, һүҙ йөрөтмәгеҙ, белмәгән әйберҙәр хаҡында һөйләмәгеҙ; бер кеше һүҙ башлаһа, аҙағы мәғлүм булһа ла, туҡтамайынса, ташлап китмәгеҙ. Был кешелекһеҙ булыуҙы күрһәтә.

*БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ*

# КӨСТӘРЕ ТИҢ,

## әммә бер батыр икенсеһен еңә. Ниңә?




**"Киске Өфө" гәзите "Башҡорт телендә һөйләшәм" тигән конкурс иғлан иткәйне. Конкурстың төп маҡсаты - балаларҙа, йәштәрҙә туған телдә матур итеп һөйләшеүгә, уйҙарыңды, фекерҙәреңде тейешле тәртиптә теҙеп, дөрөҫ яҙырға өйрәтеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Бирелгән темаға инша-мәҡәләһен конкурста ҡатнашыусы үҙаллы башҡара - был конкурстың төп талабы, сөнки быны тикшереп ҡарау мөмкинлеге буласаҡ: иң яҡшы эш авторҙары араһынан еңеүсене редакцияла йомғаҡлау ярышы үткәреп билдәләйәсәкбеҙ. Конкурс еңеүселәренә редакция махсус бүләктәр - кеҫә телефондары тапшырасаҡ. Иғлан ителгән "Булыр илдең балаһы бер-береһенә "батыр" тиер, булмаҫ илдең балаһы бер-береһенә "бахыр" тиер" темаһына батырлыҡ, бахырлыҡ тураһындағы уйланыуҙар, һығымталар, фекерҙәр сағылған мәҡәләләр көтөп ҡалабыҙ һәм беренсе эште тәҡдим итәбеҙ.**

"Ҡасандыр, әле һин дә, мин дә Ер йөҙөндә булмағанда, ете диңгеҙ, ете тау артында ике ил булған, - тип һөйләгәйне оло ҡартәсәйем. - Был илдәрҙең ике арыҫлан шәйе батыры булған. Бер саҡ халыҡ уларҙы көрәштереп ҡарарға уйлаған. Имеш, ҡайһыныһы көслөрәк икән? Көрәш оҙаҡ һәм көсөргәнешле барған. Ниһәйәт, Данхан Мәрханды еңгән. Халыҡ аптырауға ҡалған: "Батырҙарҙың көстәре тиң ине бит, сер нимәлә?"

Ҡартәсәйемде оҙаҡ көндерергә маташһам да, был серҙең асылына төшөндөрмәне. Инде ҡартәсәйемдең донъя ҡуйыуына ла байтаҡ һыуҙар аҡты, күп елдәр иҫте. Мин Салауат ҡалаһына килеп, педагогия колледжының башҡорт филологияһы бүлегендә уҡый башланым. Әлеге мәлдә ҡала мәктәптәренең береһендә практика үтәм, уҡыусыларға башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән дәрестәр бирәм. Тәүҙә дәртләнеп эш башлап ебәрҙем. Тик ике аҙна ғына ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, арыным. Битарафлыҡтан арыным. Уҡыусыларҙың туған теленә вайымһыҙ ҡарашы, уны ихтирам итмәүе, бысратыуы хайран ҡалдыра. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: һинең алдыңда егерменән артыҡ башҡорт балаһы үҙ теленән үҙе көлөп ултыра. Бер көндө 8-се синыф уҡыусыһы: "Башҡорт телен өйрәнгәнсе, инглиз телен өйрәнәм, ул миңә еңелерәк бирелә", - тигәс, ултырып иларҙай булдым. Буш фекер ҡыуыш башта тыуа тигәндәреме был әллә?..

Мәктәптәге хәл тураһында үҙемдең тиҫтерҙәремә һөйләнем һәм мине иң көйөндөргәне шул булды: уларҙың күбеһе туған теленә битараф. "Туған телен телəгән кеше генә өйрәнһен", - тигән фекерҙе әйтеүҙән дә тартынманы ҡайһылары. Башҡортостаныбыҙҙың алдынғы ҡарашлы вәкилдәре һүҙҙәреме был? Сит илгә китеп йәшәүҙе, сит телде өйрәнеүҙе туған телдән өҫтөнөрәк ҡуябыҙ. Телгә терәк ауылдарҙа ғына ҡаламы ни хәҙер?

Ваҡытым юҡ, тип, юҡҡа ваҡыт уҙғарыусылар күбәйҙе... Бәләкәй уңыштарын ҙурайтып күрһәтергә тырышыусылар, ҡоро һандарҙан һәм географик атамаларҙан торған биографиялар бар... Самаһыҙ байлыҡ туплауға ынтылыу теләге лә асылыбыҙҙан ситкә тайпылырға мәжбүр итә. Донъяның кеме юҡ, бер яҡшыға - бер яман, тиһәләр ҙә, ата-бабаларыбыҙҙың яҡшылығына яманлыҡ менән түләү оҡшаймы һеҙгә? Миңә юҡ! Мин илемде шау сәскәгә күмелгән, баллы һуты тамып торған йүкә ағасындай күргем килә! Битараф булмайыҡсы бер-беребеҙгә, телебеҙгә. Сәйәсәт, иҡтисад, эшҡыуарлыҡ, тәбиғәт, мәғариф, тел проблемаларын бергә сисһәк, яңы фекерҙәр, яңы уйҙар һәм мәсьәләне дөрөҫ хәл итеү юлдары күберәк булыр ине.

Илем, телем, халҡым минең
Терәк булһа ғүмергә,
Һынатмаҫмын, ташламаҫмын,
Тыуып-үҫкән илемде,
Ҡайнар һөйгән телемде!

Ошо урында тағы ла ҡартәсәйем һөйләгән әкиәт иҫемә төшә. Данхан менән Мәрхан батырҙарҙың көсө бер булһа ла, тыуған илдәренең көсө ер менән күк араһында булып сыға бит. Ярышта Данханды халҡы, иле гел янында тороп хуплаған, ә Мәрханды үҙ халҡы битарафлығы менән еңелеүгә дусар иткән. Башҡортостаныбыҙ Мәрхан хәленә ҡалмаһын, үҙебеҙҙе үҙебеҙ күтәрәйек, батыр яһайыҡ.

**Әлиә ТЕЛӘҮБИРҘИНА.**
**Салауат ҡалаһы.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*



# ИГӘҮ

Адем иртән иртүк тороп, баҙарға сығып китә. Бар һатып алған нәмәләрен бер сумкаға тултыра. Һатып алған нәмәләр араһында игәү ҙә була, тап ул сумканы тишкесләп бөткән икәнен ҡайтып еткәс кенә күреп ҡала Адем. Әйберҙәрен урынлаштырып бөткәс, итле төргәкте лә тишеп, ҡанға буялған игәүҙе аҙаҡ йыуып алырмын тип, бер мөйөшкә һалып тора. Ит еҫенә бесәй йүгереп килә лә, баяғы игәүҙе ялай башлай. Ялай, ялай, әммә игәүҙәге ҡанды ялап бөтөрә алмай. Баҡтиһәң, бесәй игәүҙең йөҙөнә телен яралаған да, үҙ теленән һарҡыған ҡанды ялай икән. Үҙе, табышымды тартып алып ҡуймаһын, тигәндәй, Адем яғына ҡарап-ҡарап ала, ти.

Адем был хәлде атаһына һөйләй. Атаһы йылмайып ҡуя ла, шулай ти: "Ҡайһы бер кешеләр ҙә һинең бесәйеңә оҡшаш, улым. Улар зарарлы ғәҙәттәре үҙҙәренә үк зыян килтерә икәнен аңламай. Ошо бесәй һымаҡ, уларҙың зарарлы ғәҙәттәренә ҡаршы торған кешеләргә асыуланалар хатта."

- Бәлки, уларға насар ҡылыҡ ҡылырға ҡамасауламаҫҡа кәрәктер? Быны улар үҙҙәре аңларға тейеш,- ти Адем.

- Юҡ, улым, беҙ уларҙы насар ҡылыҡтары менән икәүҙән-икәү ҡалдырырға тейеш түгелбеҙ. Беҙҙең бурыс - кешеләрҙе насар ҡылыҡтарҙан баш тарттырыуға өлгәшеү.

Шунан ул Адемға Бәйғәмбәрҙең ошо хәҙисен һөйләп ишеттерә:

"Яуызлыҡты күргән кеше уны үҙ ҡулдары менән туҡтатһын. Ҡулдары менән туҡтата алмаһа, һүҙҙәре менән туҡтатһын. Былай ҙа булдыра алмаһа, яуызлыҡты йөрәге менән кире ҡаҡһын".

АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!

# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?




Ерһеҙ башҡорт һәм татарҙарҙы берләштергән территориаль община (ауыл) уларҙың мәнфәғәттәрен яҡлай. Шул уҡ ваҡытта ерле халыҡ араһынан сыҡҡан припущенниктар элекке аҫабалаштары менән һәр төрлө бәйләнештәрен өҙмәгән. Тел, мәҙәниәт, ғөрөф-ғәҙәттәр уртаҡлығы ошо бәйләнештәрҙе һаҡлау мөмкинлеген ҡалдыра. Башҡорт припущенниктары аҫабалар һәм килмешәктәр араһында тороп, уларҙы бер-береһе менән бәйләүсе ролен үтәй. Ошо роль тора-бара уларҙың үҙҙәренең иң тәүгеләрҙән булып татар мөхитенә инеп китеүенә сәбәп була. Башҡорт аҫабаларының да үҙҙәре припущенниктар итеп алған татар-типтәрҙәр, яһаҡ түләүсе, хеҙмәти һәм сауҙагәр татар һәм мишәрҙәр менән этник һәм мәҙәни бәйләнеше киңәйә бара. Көнбайыш Башҡортостан аҫабаларының күп йылдар буйы үҙенең төп этносынан айырылып, татар крәҫтиәндәре араһында йәшәүе һуңынан уларҙың татар милләте тарафынан ассимиляцияланыуына алып килә.

Улар араһында тәүге бәйләнештәр XVI быуат аҙағында - XVII быуат баштарында барлыҡҡа килеп, бер нисә быуат дауамында аралашып йәшәү этник яҡынлашыуға килтерә. Әммә аҫабалар һәм припущенниктар араһындағы социаль айырма Октябрь революцияһына тиклем һаҡланып ҡала. Аҫабалыҡ хоҡуғының юҡҡа сығарылыуы көнбайыш башҡорттарының татарҙар тарафынан ассимиляцияланыуына тотҡарлыҡ иткән һуңғы ҡаршылыҡты алып ташлай. Припущенниктарҙың һәм элекке аҫабаларҙың ергә хоҡуҡтары тигеҙләнеүе көнбайыш башҡорттарының үҙ этник асылынан яҙыуына килтерә.

Башҡорт-припущенник мөнәсәбәттәрен ҡайһы бер тикшеренеүселәр дөрөҫ яҡтыртмай. Ер биләмәләрен бүлеү буйынса 1832 йылдың 10 апрелендәге батша указына һылтанып, ер биләмәләре артҡан типтәр һәм мишәрҙәрҙең башҡорт исеменә күсеүе тураһында яҙыусылар бар. Әммә ошо указға ярашлы, аҫабаларҙың да, припущенниктарҙың да ергә хоҡуҡтары сикләнә. Ер биләмәләрен бүлеү 1816 йылғы VII ревизияла кем нисек теркәлгән (аҫабамы, припущенникмы, ғәскәри хеҙмәттәме), шуға ярашлы башҡарыла. Аҫаба башҡорттарға йән башына - 40, ғәскәри ведомствоға ҡараған припущенниктарға - 30, гражданлыҡ сословиеһына ҡарағандарына 15 дисәтинә ер бүлеү рөхсәт ителә. Әлбиттә, аҫабаларға ер милек сифатында, ә припущенниктарға файҙаланыу өсөн генә бирелә.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр башҡорттарҙың ҡарауһыҙ, буш ятҡан ерҙәренең күсеп килеүселәргә милеккә бирелеп, уларҙың "башҡорт" булып китеү мөмкинлеге тураһында фараз итә. Был фараз бер ни менән дә нигеҙләнмәгән. Киреһенсә, тарихи сығанаҡтар быны инҡар итә. П. И. Рычков 1774 йылда "Экстрат башкирского народа" исемле яҙмаһында башҡорттар тураһында: "...привязаны весьма к своим землям и угодьям, так что, почитая их собственными и старинными своими вотчинами, нередко за них бунтовали и умирали, чему в известиях о сем народе многие примеры находятся", - тип яҙа. Башҡорт хәл-торошон яҡшы белгән И. К. Кирилов 1735 йылдың 13 ғинуарында хөкүмәткә тәғәйенләнгән "Изъяснение" исемле яҙмаһында бик аныҡ мәғлүмәт бирә: "Земли и угодьи между родами все разделены, а в некоторых родах уже от настоящих происошли роды, кои называют аймаками, а инде тюбами, и тако никакой земли и угодий нет, кои бы свободно лежали".

Башҡорт сословиеһына күсеүсегә аҫабалыҡ хоҡуғы бирелеп, община ерҙәрен һатыу йәиһә ҡуртымға биреүҙә ҡатнашыу, ошонан үҙенә тейешле килем алыу мөмкин булыр ине. Әммә татар, мордва, удмурт, мари типтәрҙәренә һәм мишәр припущенниктарына ғына түгел, башҡорт типтәрҙәренә лә башҡорт аҫаба ерҙәренә хужа булыу мөмкин булмай. Бындай осраҡтар үтә һирәк булып, башҡорт аҫабаларының етем припущенник балаһын уллыҡҡа алыуы йәиһә кемдеңдер ер хужаһының тол ҡатынына өйләнеүе менән генә бәйле. 1841 йылда теркәлгән 72 666 мишәрҙең 4,8 процентының аҫабалыҡ хоҡуғы була тороп та, улар башҡортлоҡҡа күсеү тураһында уйламай, һәм бының уларға һис бер кәрәге булмаған.

**Өсөнсө фактор. Көнбайыш Башҡортостанда этник-ара процестарға дин йоғонтоһо көслө була. Башҡорттар һәм татарҙар бер үк мосолман кешеләре булғас, уларҙың тығыҙ аралашыуы өсөн дини ҡаршылыҡтар булмай.** Ярым күсмә тормош алып барыусы аҫабалар менән сағыштырғанда, ултыраҡ тормошҡа күскән көнбайыш башҡорттарының ижтимағи тормошона Ислам тәрәнерәк үтеп инә. Уҡымышлы дин әһелдәренең татар сығышлы булыуы ла Бөгөлмә һәм Минзәлә башҡорттарының татар ассимиляцияһына бирелеүендә ошо факторҙың мөһим роль уйнауын раҫлай.

**Дүртенсе фактор. Көнбайыш Башҡортостандың дүрт өйәҙе башҡорттарының татарҙар менән аралашыуы уларҙың үҙ дәүләтселеге бөтөнләйгә булмаған шарттарҙа бара. Һуңынан ошо өйәҙҙәр (Сарапул өйәҙенән башҡа) Татарстан Республикаһы составына индерелеп, унда йәшәүсе башҡорттар үҙҙәренең этник үҙаңын тулыһынса алмаштыра.**

Мәҫәлән, ТАССР составына ингән Бөгөлмә өйәҙендә ваҡытында башҡорт-татар нисбәте 0,35 : 2,84 булһа ла, сәйәси фактор ошо өйәҙ башҡорттарының тулыһынса татарлашыуына килтерә. Башҡа төбәктәрҙә этнос-ара бәйләнештәрҙең бик интенсив булыуына ҡарамаҫтан, этник ассимиляция күҙәтелмәй. Бәләбәй һәм Бөрө өйәҙе башҡорттарының теле ассимиляцияға дусар булһа ла, улар үҙҙәренең этник үҙаллылығын һаҡлап ҡала. Пермь губернаһы Уса өйәҙенең 28 ауылында йәшәүсе ғәйнә башҡорттары, татарҙар һәм фин телле халыҡтар менән аралашып, этник яҡтан ҡатнаш мөхиттә йәшәп, тел яғынан ассимиляцияға бирелгән хәлдә лә, үҙҙәренең этник асылын һаҡлап ҡалған. Әйтелгәндәрҙән тик бер һығымта эшләп була: Татарстан һәм Удмурт республикалары составына индерелгән элекке Бөгөлмә, Минзәлә, Алабуға һәм Сарапул өйәҙҙәре башҡорттарының этник ассимиляцияланыуына хәл иткес социаль факторҙар менән бер рәттән, билдәле ижтимағи-сәйәси шарттар, атап әйткәндә, баҫмаларҙың бер телдә генә сығарылып, мәктәптәрҙә уҡытыуҙың татар телендә алып барылыуы сәбәп була.

**Бишенсе фактор. Этник-ара процестарға демографик фактор, йәғни бер этностың һаны арта барып, икенсеһенең кәмеүе һиҙелерлек йоғонто яһай.**

1795 йылғы V ревизия мәғлүмәттәре Ырымбур губернаһының этник яҡтан ҡатнаш ауылдарында башҡорттарҙың татар һәм типтәрҙәргә ҡарағанда байтаҡҡа күберәк булыуын күрһәтә.

### 1795 йылда ҡатнаш ауылдарҙа башҡорт, типтәр һәм татарҙарҙың һаны

| № т/б | Өйәҙҙәр | Халыҡ һаны һәм өлөшө | | | | | | Татар һәм типтәрҙәрҙең проценты |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | башҡорттар | | типтәрҙәр | | татарҙар | | |
| | | абс. | % | абс. | % | абс. | % | |
| 1. | Верхнеуральск | 18 847 | 98,4 | 161 | 0,9 | 139 | 0,7 | 1,6 |
| 2. | Бәләбәй | 17 280 | 66,5 | 6 360 | 24,5 | 2 343 | 9 | 33,5 |
| 3. | Бөрө | 20 504 | 87,1 | 2 075 | 8,8 | 960 | 4,1 | 12,9 |
| 4. | Бөгөлмә | 2 417 | 38,8 | 2 209 | 35,5 | 1 604 | 25,7 | 61,2 |
| 5. | Боғорослан | 444 | 90,8 | 31 | 6,3 | 14 | 2,9 | 9,2 |
| 6. | Быҙаулыҡ | 1 115 | 100 | - | - | - | - | - |
| 7. | Минзәлә | 17 840 | 72 | 4 528 | 18,3 | 2 410 | 9,7 | 28 |
| 8. | Ырымбур | 22 188 | 100 | - | - | - | - | - |
| 9. | Стәрлетамаҡ | 27 129 | 89,3 | 1 696 | 5,6 | 1 544 | 5,1 | 10,7 |
| 10. | Троицк | 14 449 | 97,8 | 35 | 0,2 | 298 | 2 | 2,2 |
| 11. | Өфө | 8 409 | 67,8 | 1 392 | 11,2 | 2 612 | 21 | 32,2 |
| 12. | Силәбе | 10 069 | 100 | - | - | - | | - |

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**XVIII быуат аҙағында типтәр һәм татарҙар бары тик Бөгөлмә өйәҙендә генә башҡорттарҙан күберәк була. Бәләбәй, Минзәлә һәм Өфө өйәҙҙәрендә улар ауыл халҡының өстән бер өлөшөн тәшкил итә. XIX быуаттың тәүге сирегендә уларҙың дөйөм һаны арта бара, был 1816 йылғы VII ревизия материалдарында бик асыҡ сағылыш тапҡан. Был ваҡытта Бөгөлмә өйәҙендә бөтә төр припущенниктар (типтәрҙәр, татарҙар, мишәрҙәр, дәүләт һәм удел крәҫтиәндәре) аҫаба башҡорттарҙан 3 тапҡырға, Бөрө өйәҙендә - 2,5 тапҡырға, Бәләбәй өйәҙендә - 2 тапҡырға тиерлек күберәк була. Минзәлә, Өфө һәм Троицк өйәҙҙәрендә лә припущенниктар аҫабалар һанынан күберәк булып китә. Шул уҡ осорҙа Ырымбур, Силәбе, Быҙаулыҡ, Боғорослан өйәҙҙәрендә припущенниктар бик аҙ йәшәһә, Верхнеуральск өйәҙендә улар бөтөнләйгә булмай.**

### 1816 йылғы VII ревизия буйынса аҫабалар һәм припущенниктар һаны

| № т/б | Өйәҙҙәр | VII ревизия буйынса (ер енесле) йән иҫәбе | |
|---|---|---|---|
| | | аҫаба башҡорттар | припущенниктар |
| 1. | Бәләбәй | 12 772 | 24 522 |
| 2. | Бөрө | 15 174 | 35 428 |
| 3. | Быҙаулыҡ | 1 603 | 218 |
| 4. | Бөгөлмә | 2 070 | 5 884 |
| 5. | Боғорослан | 588 | 312 |
| 6. | Минзәлә | 11 746 | 12 439 |
| 7. | Ырымбур | 15 745 | 92 |
| 8. | Стәрлетамаҡ | 14 330 | 4 750 |
| 9. | Троицк | 5 636 | 6 800 |
| 10. | Өфө | 4 989 | 5 097 |
| 11. | Силәбе | 6 611 | 177 |
| 12. | Верхнеуральск | 15 909 | - |
| **Бөтәһе** | | **107 173** | **95 709** |

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

(Дауамы бар).

*✓ Әгәр хеҙмәт яратаһың, эшкә уңғанһың, кешеләр менән ихлас аралашаһың икән, һине лә ихтирам итәсәктәр, эшле лә, ашлы ла буласаҡһың.*



*...ЭШ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘНӘ*



# ТАУ АҠТАРЫРҒА ҺӘЛӘТЛЕ БУЛЫП ТА...

## йылғала балыҡ юҡлыҡҡа зарланырһыңмы?

**Бөгөн ҡала йөҙөн нимәһеҙ күҙ алдына килтереп булмай? Әлбиттә, рекламаһыҙ. Эйе, ысынлап та, йорт фасадтары, урам бағаналары эреле-ваҡлы төрлө-төрлө реклама яҙыуҙары менән сыбарланған. Уларға күҙ өйрәнеп бөтһә лә, хатта ҡайһы саҡта асыу килеп ҡуйһа ла, яңы реклама элеп ҡуйылдымы, шундуҡ иғтибар бирәһең һәм ундағы мәғлүмәтте хәтереңә һалып та ҡуяһың. Тимәк, беҙ был хеҙмәтләндереү төрөнә мохтаж булып сығабыҙ түгелме? Ә бына Дамир МИҢЛЕҒОЛОВ үҙен тап ошо реклама өлкәһе аша тапҡан, тиһәң дә була. Реклама эшен энәһенән ебенә ҡәҙәре белгән Дамир Фоат улы бөгөн "Неон нуры" реклама агентлығы директоры булып тора. Уның сығышы "Заман ауыр, эш юҡ" тип, йәки "Баҙар яуланып бөткән, яңы эш башлау мөмкин түгел" тип, ғөмүмән, үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алып, һынауҙарға ҡаршы торорға ҡурҡҡан... ир-азаматтарға аҙмы-күпме кәңәш булыр һымаҡ.**

### Үҙемде реклама эшендә таптым

Мин һөнәрем буйынса уҡытыусымын. Ә реклама өлкәһенә килеп инеүем осраҡлы ғына килеп сыҡты, тиһәң дә була. Минән уҡытыусы сыҡмаясаҡ, тигән икеле уйҙарға бирелеп йөрөгәндә, урамда күҙемә реклама агентлығына эшкә саҡырып яҙылған иғлан салынды. Мин шул мәлдән файҙаланып, тәүәккәлләнем дә ҡуйҙым. Шул бер генә иғлан минең тормошома бөтөнләй икенсе йүнәлеш бирҙе. Был, ысынлап та, минең юлым, минең тәғәйенләнешем булып сыҡты. Был агентлыҡта эшләүемә быйыл ун һигеҙ йыл тула. Башта кәрәкле тауарҙар менән тәьмин итеүсе хеҙмәткәр булараҡ эш башланым, аҙаҡ карьера баҫҡысы буйлап үрләнем. Реклама эшмәкәрлеген үҙемсә күрә белеүем арҡаһындалыр, тим, уңышҡа өлгәшеүем. Беҙ башлыса баш ҡаланың реклама дизайнын эшләү менән шөғөлләнәбеҙ.

### Етәксе - карьерист ул

Аҡыллы, белемле кешеләр күп, әммә уларҙың барыһы ла етәксе булып китә алмай. Ниндәй генә етәксе лә, иң тәү сиратта, карьерист булырға тейеш. Әгәр унда был сифат юҡ икән, ул бер ваҡытта ла был вазифаны башҡара алмаясаҡ. Етәксе үҙ хеҙмәткәрҙәре һәм алып барған эшмәкәрлеге өсөн яуаплы. Ул хатта төнөн йоҡлағанда ла эшен оноторға тейеш түгел. Минең үҙемә килгәндә, әле көрсөк ваҡыты булғас, ятһам да, торһам да эшем уйымдан сыҡмай.

Реклама агентлығы менән етәкселек итеү өсөн үҙеңә лә яҡшы менеджер булырға кәрәк. Бөгөнгө иҡтисади көрсөк ваҡытында заказсыны реклама кәрәклегенә инандырыу ауыр. Күпселек осраҡта заказсының ыңғайына ла киләһең, шулай итмәй ҙә булмай, сөнки беҙ улар иҫәбенә йәшәйбеҙ бит. Үҙ эшеңдә уңышҡа өлгәшеү өсөн тиҙ һәм күп итеп аҡса эшләүҙе маҡсат итеп ҡуйыу дөрөҫ түгел һәм улай килеп тә сыҡмай. Әйтәйек, мин заказсыма ҙур хаҡ ҡуям һәм уның талабын тулыһынса ҡәнәғәтләндермәйем икән, һис шикһеҙ, мин тағы ла бер клиенттан ҡолаҡ ҡағам, тигән һүҙ. Шуға ла беҙ хаҡты түбәнерәк ҡуйырға, шул уҡ ваҡытта материалды сифатлы тауарҙан эшләргә тырышабыҙ. Шулай иткәндә, заказсым минең даими клиентым ғына булып ҡалмай, ә бүтәндәрҙе лә беҙгә йүләп итә.

Ғөмүмән, һин үҙ шөғөлөңдән рухи ҡәнәғәтлек кисерергә тейешһең. Ә был ҡәнәғәтлек эшеңә ҙур теләк менән шатланып барыуҙан, көн буйы башҡарылған эшеңдең һөҙөмтәһен күреп, өйөңә яҡшы кәйеф менән ҡайтыуҙан, клиенттарыңдың рәхмәтен ишетеүҙән һәм уларға ниндәйҙер файҙа килтерә алыуыңдан килә.



### Реклама бар һәм буласаҡ

Яҡшы тауар рекламаға мохтаж түгел, тип әйтәләр. Әммә яҡшы тауарҙың яҡшылығын да кешеләргә еткерергә кәрәк бит әле. Бөгөнгө юғары тиҙлек менән барған һәм баҙар иҡтисады көслө булған заманда ҡулланыусының бөтә тауар тураһында хәбәрҙар булыр өсөн ваҡыты ла, мөмкинлеге лә юҡ. Ә реклама был осраҡта ярҙамға килә һәм ул ике яҡ өсөн дә отошло булып тора. Әлеге заманды мәғлүмәт заманы, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Әлбиттә, реклама талап итмәгән тауарҙар бар ул. Әйтәйек, "Amway" фирмаһы. Был компания тышҡы рекламаға мөрәжәғәт итмәйенсә, тауарын ҡулдан-ҡулға тапшыра. Әммә күптәр үҙ тауарын ҡулланыусыға реклама аша еткереүҙе хуп күрә. Рекламаланған барлыҡ тауарҙар ҙа сифатһыҙ, тип әйтмәҫ инем. Тик шул ғына: реклама аша тәҡдим ителгән тауар ҡиммәтерәк була.

Ниндәй генә реклама булмаһын, ул кешене дөрөҫ юлдан тайпылдырырға тейеш түгел. Әйтәйек, элек урам тулы, шул иҫәптән телевизорҙан да, һыра, араҡы, тәмәке рекламаһы булды. Хәҙер уларҙы тыйып, яҡшы эшләнеләр. Ә бындай заказсылар, ғәҙәттә, рекламаға аҡса йәлләмәй ине. Тимәк, реклама ҙур көскә эйә, юғиһә, уға шул тиклем аҡса һалмаҫтар ине. Бында мәсьәлә рекламаның кәрәклеге һәм кәрәкмәгәнлегендә лә түгел, ул бар һәм буласаҡ. Бөгөн баш ҡалабыҙ урамдарындағы реклама таҡталарының 70 проценты буш тора, беҙ хәҙер уларҙы социаль реклама өсөн бирәбеҙ.

### Ауылда ла йәшәргә була

Ауылға ҡайтам да, халыҡҡа аптырайым. Ундағы кешеләрҙең тормошҡа ҡарашы, йәшәйеш асылы бөтөнләй икенсе төрлө. Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов Йәрмәкәй районы Шахово ауылына һыуһаҡлағыс асырға килгән ваҡытта: "Бер ауылда һыуһаҡлағыс янында ултырған ирҙәр янына килеп, хәл-әхүәл һорашҡас, "Мортаза Ғөбәйҙуллович, хәлдәр шәптән түгел, һыуҙа балыҡ юҡ", тип зарландылар. Тау аҡтарырҙай ирҙәрҙең балыҡ юҡлығына зарланып ултырыуы аяныс", - тип һөйләп киткәйне. Ысынлап та, ауыл кешеһе кемдер килтереп биргәнен көтөп ултырырға күнеккән шул, һәр ваҡыт еңеллек эҙләй һәм шуның иң еңеләнә - эскегә мөрәжәғәт итә. Бөгөн ауыл кешеһенең күбеһе эскегә һалышып, юҡҡа сығып бара. Әлбиттә, был барыһына ла ҡағылмай, бына тигән итеп донъя көткән, мал табырға, лайыҡлы итеп йәшәргә тырышҡан ғаиләләр ҙә бар.

Әгәр ауылда йәшәйһең икән, аҡсаны тир түгеп табырға кәрәк. Әйҙә, ер һатып ал, күпләп мал тот, баҡса үҫтер, йә башҡа төрлө хеҙмәт менән шөғөлլән. Бөгөн аҡса юҡ, эш юҡ, тип кемдер алып килеп биргәнен көтөп ултырыр заман түгел. Үҙ йүнеңде үҙең күр, хәстәрлә, эшлә, тап. Бөгөн тиҙлек заманы, берәй мәғлүмәттән тороп ҡалдыңмы, өлгөрөүе, ҡыуып етеүе ауыр. Кешеләрҙән ҡалышырға ярамай, уларҙың нисек йәшәгенен күреп, шуны үҙеңдә лә булдырырға тырышырға кәрәк. Бөгөн ҡала халҡы ауылға, ҡала ситенә, тәбиғәткә тартылғанда, ер һатып алып, шәхси йорттар төҙөгәндә, ауыл кешеһе, киреһенсә, ҡалаға ынтыла. Ҡалала ҡалыу өсөн ул хатта ғүмер буйы ятаҡта йәшәргә лә риза. Ул ниңәлер үҙе йәшәгән ерҙең ҡәҙерен, файҙаһын күрә белмәй. Яҡшыны үҙенән түгел, ситтән эҙләп хаталана. Үҙеңдән ҡасып булмай ул. Әгәр һин ялҡау, әкрен, рәхәтте генә эҙләгән кеше икән, ҡайҙа ғына барһаң да, бер кемгә лә кәрәк түгелһең. Әгәр хеҙмәт яратаһың, эшкә уңғанһың, кешеләр менән ихлас аралашаһың икән, һине лә ихтирам итәсәктәр, эшле лә, ашлы ла буласаҡһың.

***Бөгөн ҡала халҡы ауылға, ҡала ситенә, тәбиғәткә тартылғанда, ер һатып алып, шәхси йорттар төҙөгәндә, ауыл кешеһе, киреһенсә, ҡалаға ынтыла. Ҡалала ҡалыу өсөн ул хатта ғүмер буйы ятаҡта йәшәргә лә риза. Ул ниңәлер үҙе йәшәгән ерҙең ҡәҙерен, файҙаһын күрә белмәй. Яҡшыны үҙенән түгел, ситтән эҙләп хаталана. Үҙеңдән ҡасып булмай ул.***

### Һәр ир-егет күңеле менән һунарсы

Үҙен ихтирам иткән һәр ир-егет күңеле менән һунарсылыр ул. Әммә бөтәһе лә был мөмкинлеккә эйә була алмай. Ә мин үҙемде был яратҡан шөғөлөмдән мәхрүм итә алмайым. Йәнлек атыуҙан бигерәк, урманға сығып, тәбиғәт менән аралашыуҙан кинәнес алам мин. Ҡоштар һайрауын тыңлайым. Бына сысҡан йүгереп үтә, ҡайҙалыр ҡуяндың ҡойроғо ғына күренеп ҡала, ҡуйы урман эсендә шатырлап мышы үтеп китә, тумыртҡа туҡылдай, һайыҫҡан шыҡырыҡлай, турғай сырҡылдай. Урманды нығыраҡ белгән һайын, уны тәрәнерәк аңлай башлайһың, һәр ҡыштырлауҙы ишетәһең, һәр тынды тояһың. Ә был тәьҫораттарҙы әйтеп аңлатырлыҡ та түгел. Тәбиғәтте аңлар өсөн уны тәүҙә яратырға кәрәк. Ҡышҡы ғинуар айында арҡаңа рюкзак аҫып, саңғы менән ҡар ярып, урманға барыу һәр кемдең ихтыярынан килә торған ғәмәл түгел. Тап шулай иткәндәр генә ысын һунарсы була инде. Юғиһә, һунар һылтауы менән урман-

✓ *Башҡа милләт вәкилдәре күбеһенсә үҙ телендә һөйләшә белмәй, шулай уҡ тыуған илдәренең тарихы тураһындағы һорауҙарға яуап бирә алмай. Миңә сит ерҙә бындай һорауҙар алдында ҡыҙарырға тура килмәне.*

ға сығып, кәйеф-сафа ҡороп ҡайтыусылар ҙа бар. Урманға мылтығыңды йөнлеккә тоҫҡау өсөн генә йөрөү һунарсылыҡ тип түгел, браконьерлыҡ тип аталалыр. Ғөмүмән, беҙ ғаиләбеҙ менән тәбиғәт ҡосағына сығып ял итергә, еләк, бәшмәк йыйырға яратабыҙ. Унан һуң, һунарсылыҡ минең өсөн ял итеү шөғөлө генә түгел, ул минең эшем дә. Мин һунарсылар ойошмаһында ағза иҫәпләнәм, беҙ төрлө аншлагтар үткәрәбеҙ, тәбиғәтте һаҡлауға йүнәлтелгән төрлө ҙәҙыуҙар урынлаштырыу кеүек эштәр башҡарабыҙ.

## Ғаилә именлеге - ҡатын-ҡыҙ ҡулында

Бөгөн ҡыҙ-ҡатындарҙы етәксе урындарында, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә йыш осратабыҙ. Гүзәл заттарыбыҙ үҙенең нимәгә һәләтле булыуын күрһәткеһе, мөмкинлектәрен һынап ҡарағыһы килә икән, быны тыйыу кәрәкмәй. Киреһенсә, эшләргә, йөшәргә көсө, һәләте, теләге булған ҡатын-ҡыҙға үҙен тормошҡа ашырыу өсөн ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәк. Ни тиһәң дә, улар ғаиләгә, балаға ирҙәргә ҡарағанда күпкә яуаплыраҡ ҡарай. Ғөмүмән, бөгөн ҡатын-ҡыҙға ышанысһыҙ ир менән йәшәүгә ҡарағанда, яңғыҙы бала үҫтереүе күпкә еңелерәктер ул.

Ә бына минең ғаиләмдә был күренеш бөтөнләй башҡаса. Ҡатыным Земфира менән бер ул һәм ҡыҙ үҫтерәбеҙ. Мин - аҡса табыусы, а ҡатыным - ғаилә усағының йылыһын һаҡлаусы. Әгәр мин ғаиләмде ҡарай алам икән, уның үҙен балалар тәрбиәләүгә бағышлауы күпкә файҙалыраҡ. Балаларыңдың уҡыуы ла, сәләмәтлеге лә яҡшы буласаҡ. Өйөңдә балаларың ҡараулы, тәрбиәле булыуын белгәс, күңел тыныс, үҙеңде тулыһынса эшкә арнай алаһың. Ә эштән арып ҡайтып инеүеңә көләшең йылы ашы, яҡты йөҙө менән ҡаршы ала - ир кеше өсөн бәхет шул инде ул. Ҡатын-ҡыҙ бит ул өйҙә гөл дә, көл дә итә ала. Ә өйөң гөлбаҡса икән, унда күңел һәр ваҡыт атлығып торасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөрйәндән бер егет: "Ауыл кешеһе етештергән тауарын ҡайҙа урынлаштырырға белмәй, йәғни был тауарҙы ҡулланыусыға алып барып еткереү һәм унан табыш алыуға тиклемге процесты алдан күҙаллай, бизнес-план ҡора белмәй", - тигәйне. Бәлки, ауылға ла тап ана шул реклама тигән төшөнсә һәм... рекламалаусы етмәйҙер ул. Уйлана белгәнгә яҡшы ғына ишара был. Һәр хәлдә, йүнсел йүнен таба, тигәндәй, беҙгә тауар етештерергә генә түгел, унан табыш алырға ла өйрәнергә кәрәк. Әлеге һөйләшеүҙән беҙ ошоно аңланыҡ та инде.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**




# ТАРИХЫҢДЫ ЯҠШЫ БЕЛЕҮ...

## сит ерҙә абруйыңды күтәрә

**Былтыр Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларына маҡсатлы йүнәлтмәләр менән уҡырға инеүсе студенттар беренсе сессияларын уңышлы тамамлап, каникулға ҡайтып төштө. Мәскәү хөкүмәте янындағы Финанс академияһының финанс һәм кредит факультеты студенты Урал ШАФИҠОВ үҙенең баш ҡалала ярты йыл эсендә алған тәьҫораттары менән уртаҡлашмаҡсы. Һүҙ - Уралға:**

### Уҡыуым хаҡында

Өфө ҡалаһынының Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһын көмөш миҙалға тамамлағас, Хөкүмәтебеҙҙең маҡсатлы йүнәлтмәһе буйынса Мәскәү хөкүмәте янындағы Финанс академияһының финанс һәм кредит факультетына уҡырға индем. Уға тиклем төрлө уҡыу йортон ҡарап сыҡтым, Өфөлә ҡалырға ла теләк бар ине, сөнки класташтарымдан, туғандарымдан айырылғым килмәгәйне. Шулай ҙа Мәскәүҙә белем алырға мөмкинлек сыҡҡас, күп уйлап тормай, шунда уҡ ризалаштым. Башта ҙур ҡалаға яраҡлашып китеүе, әлбиттә, ауыр кеүек булды, атаәсәйем дә минең өсөн ҡурҡҡайны. Тәүге йыл уҡығанға күрә, бөтә көсөмдө уҡыуға һалдым, дәрестәребеҙ иртәнән кискә тиклем барғанга күрә, уҡыуҙан тыш нимә менәндер шөғөлләнергә ваҡытым булманы.

Финанс өлкәһе мине электән ҡыҙыҡһындырҙы, гел генә ошо юҫыҡта уҡырға, эшләргә хыяллана торғайным. Киләсәктә уҡыуымды тамамлап, дипломлы белгес булғас, мотлаҡ Башҡортостаныма ҡайтасаҡмын. Башҡортостандың киләсәге белемле, аҡыллы йәштәр ҡулында. Беҙ үҙ байлығыбыҙҙы, үҙ мөмкинлектәребеҙҙе үҙебеҙ файҙаланырға тейешбеҙ. Ә бының өсөн илебеҙгә нәҡ белемле йәштәрҙең ҡайтыуы кәрәк тә инде.

Әйтеүемсә, беҙҙең академияла уҡыуға ла, тәртипкә лә талаптар юғары. Беҙҙә студенттар ҡоро бушҡа дәрес ҡалдырмай, сөнки бер көн дәрес ҡалдырһаң да, һуңынан үҙеңә ауырға тура киләсәк. Тағы ла беҙҙең академияла башҡа юғары уҡыу йорттарынан айырмалы рәүештә, һәр көн өйгә эште тикшереү ғәҙәте бар. Мин был ысулды бик дөрөҫ тип һанайым, сөнки быға тиклем ата-әсәһе ҡарамағында булған студентҡа "иркенәйеп", үҙенсә йәшәй башларға мөмкинлек булмаясаҡ. Юғиһә, ҡайһы бер йәштәрҙең үҙ аллы тормош юлына баҫҡас, ғаиләһенән айырылғас насар юлға баҫҡандарын ишетеп-күреп торабыҙ. Шулай уҡ дәрескә ваҡытында килеү шарт. Әгәр бер минутҡа һуңлаһаң, дәрескә индермәйҙәр. Ә тәртип яғына килгәндә, академия биләмәһе эсендә бөтөнләй тәмәке тартыу рөхсәт ителмәй. Тәмәке тартып тотолған студент шунда уҡ уҡыуҙан ҡыуыла.

Миненсә, Мәскәү юғары уҡыу йорттарының бер нисә өҫтөнлөклө яғы бар. Беренсенән, бында белем кимәле юғары, уҡыуға ла, тәртипкә лә талаптар көслө. Мәскәү юғары уҡыу йортон тамамлаусы студент үҙ һөнәре буйынса тулы белемгә эйә, тип ышаныслы әйтергә була. Икенсенән, Мәскәү юғары уҡыу йорто дипломдары бөтә илдәрҙә лә үҙ көсөн юғалтмай.

### Сит ерҙә рухташ дуҫтар кәрәк

Мәскәү ҡалаһында "Мәскәү башҡорттары" тигән йәштәр ойошмаһы барлығын алдан белә инем, шуға күрә баш ҡалаға килгәс тә иң беренсе ошо ойошма хаҡында белешеп, яҡташтарымды эҙләп таптым. Әле ойошманың әүҙем ағзаһымын, Мәскәү башҡорттары өсөн уҙғарылған бер саранан да ситтә ҡалмаҫҡа тырышам. Сит ерҙә үҙебеҙҙең рухыбыҙҙы һаҡлап ҡалыр, ят мөхиттә юғалып ҡалмаҫ өсөн көслө рухлы яҡташтар иң беренсе ярҙамға килә лә инде. Беҙ быны аңлайбыҙ, шуға күрә яҡташтар менән бәйләнеште юғалтмай, аралашып торорға тырышабыҙ.

Төркөмөбөҙҙә төрлө милләт балалары уҡый, улар араһында башҡорттарҙан мин бер үҙем генә. Төрлө яҡтан йыйылғас, бер-беребеҙҙең милләт тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәте менән ҡыҙыҡһынабыҙ. Башҡа милләт вәкилдәре күбеһенсә үҙ телендә һөйләшә белмәй, шулай уҡ тыуған илдәренең тарихы, милләтенең бөйөк кешеләре тураһындағы һорауҙарға ла тулыһынса яуап бирә алмай. Миңә сит ерҙә бындай һорауҙар алдында ҡыҙарырға тура килмәне, сөнки халҡыбыҙҙың үткәнен дә яҡшы беләм, бөгөнгөһө менән дә хәбәрҙармын, шулай уҡ бөйөк шәхестәребеҙ тураһында ла матур итеп һөйләй алам. Шуға күрә, минең аша төркөмдәштәрем Башҡортостан, башҡорттар тураһында дөрөҫ һәм тулы мәғлүмәт ала алды. Минең үҙ илем тураһында ғорурланып, һоҡланып һөйләүем, милли телемдә яҡшы белеүем уларҙы, ысынлап та, һоҡландырҙы. Шуға күрә сит ҡалаға, йәки илгә барыусы яҡташтарыма тыуған республикабыҙҙың тарихын, билдәле шәхестәрен өйрәнегеҙ, тип кәңәш итер инем. Ситтә, тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған ошо һорауҙарҙы белмәү арҡаһында, оятҡа ҡалыуығыҙ ихтимал.

### Мәскәүҙә - мәскәүсә

Мәскәү - ҙур ҡала, унда юғалып ҡалмаҫ өсөн үткер, ҡыйыу, батыр булырға кәрәк. Ул шулай уҡ кешене үҙ аллы булырға өйрәтә, сөнки нисек кенә ауыр булмаһын - һине унда бер кем йәлләмәй, ҡолаһаң - торорға ярҙам ҡулын һуҙмай. Һин унда тик үҙ көсөңә таянып, үҙ аллы үҫергә тейеш. Шулай уҡ Мәскәү кешене етеҙлеккә өйрәтә, йәғни тиҙ уйларға, ниндәйҙер мәсьәләне хәл иткәндә тиҙ ҡарар ҡабул итергә кәрәк. Һин ниндәйҙер эште бөгөн эшләмәһәң, иртәгә һинең урынға икенсе берәүҙең баҫыуы ихтимал. Кешеләр араһында, бик һиҙелмәһә лә, үҙ-ара көрәш, ярыш көслө.

Ят мөхиттә үҙ урыныңды алыр, башҡа кешеләр менән уртаҡ тел табыр өсөн, миненсә, иң беренсе тыныс булырға кәрәк. Сит кешеләр араһына барып кергәс тә иң тәүҙә улар һине өйрәнә. Был үҙенә күрә бер һынау булып тора. Әгәр ошо беренсе һынауҙы яҡшы үтһәң, артабан ауырлыҡтарҙы еңелерәк кисерерһең һымаҡ.

Миңә ундай "ҡаты" һынауҙар аша үтергә тура килмәне әлегә, сөнки беҙҙе өлкән курс студенттары тәүҙә үк яҡшы ҡаршы алды, беренсе көндә үк үҙҙәре килеп танышты, кәңәштәр бирҙе. Беҙ быға тиклем өлкән курс менән бәләкәй курс студенттары тураһында төрлө хәлдәр булғылай, тип ишетеп, был осрашыуҙарға алдан әҙерләнгәйнек, уларҙың шундай яҡты йөҙ менән ҡаршы алыуына хатта аптырап ҡалдыҡ.

Быйылғы XI класс уҡыусыларына бер нисә кәңәшемде бирер үткем килә. Уҡырға инеүгә етди ҡарағыҙ, ҡайҙа уҡырға инһәм дә булды, тип кенә уйламағыҙ, ә мотлаҡ үҙегеҙ яратҡан, күңелегеҙ ятҡан һөнәрҙе һайлағыҙ, сөнки һеҙгә һуңынан һайлаған һөнәрегеҙ буйынса эшләргә, артабан үҫергә тура киләсәк. Ә һайлаған һөнәрең күңеленә ятмаһа, үҫеш булырмы? Һәм бер ҡасан да бейегеррәккә ынтылырға ҡурҡмағыҙ, бөтә уңышлыҡтар ҙа һеҙҙең үҙегеҙҙән тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле абитуриент сағында Уралдың атаәсәһе менән һөйләшергә тура килгәйне. Шул ваҡытта улар: "Ҙур ҡалаға уҡырға ебәрергә ҡурҡһаҡ та, улыбыҙға ышаныбыҙ көслө, ул бирешмәйәсәк, беҙҙең йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәйәсәк", - тип ышаныслы әйткәйне. Беҙ ҙә Урал кеүек егеттәр ата-әсәнең ышанысын аяҡ аҫтына һалып тапамаҫ, яҡты өмөтөн аҡлар, тигән ышаныста.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**



✓ *Усаҡта дөрләп янған кәпәсенең көйөк еҫе Айратты, шулай итеп, бер секунд эсендә үҙ асылына ҡайтарҙы ла ҡуйҙы. Юҡ, утта уның кәпәсе түгел, гүйә, ғорурлығы ыңғырашып яна ине.*






Айрат тәүәккәлләне. Өҫтәл артына ултырғас, ата-әсәһенә ҡыҙҙары Ләйлә менән өйләнешергә теләүҙәре хаҡында әйтеп, ризалыҡ һораны. Ни тиһәң дә, егеттең ата-әсәһе әллә ҡасан уҡ ең һыҙғанып туйға әҙерләнә. Ләкин көтөлмәгән хәл килеп тыуырын Айрат күҙ алдына ла килтермәгәйне шул.

- Һинең әсәйеңде үҙемә ялсы, атайыңды ат ҡараусы итеп эшкә алайыммы инде, улай булғас? - тип мыҫҡыллы һүҙҙәр әйтеп һалмаһынмы ҡыҙҙың әсәһе.

Тупһыҙ һүҙҙәр Айратты тәүҙә һиҫкәндереп тетрәндерҙе. Уларҙың тәьҫиренән үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән егет ғәрлегенән янды. Мөһабәт кәүҙәһе сайҡалып ҡуйғандай булды. Егет үҙенә ят булған ерәнгес был йөктән тиҙ генә ҡотолорға теләгәндәй, нигә тотонорға ла, ни эшләргә лә белмәгәндәй, ҡулындағы кәпәсен мейестәге утҡа бәрҙе. Затлы тиренән тегелгән яңы кәпәс дөрләп янды ла бөттө. Ҡып-ҡыҙыл ҡуҙға әйләнгәс кенә таралмайынса оҙаҡ баҙлап торҙо. Өй эсенә йәшен тиҙлегендә көйгән тире еҫе таралды. Гүйә шунда Айраттың ғорурлығы ла, һөйөүе лә ыңғырашып янды. Янып көлгә әйләнде лә, унан көл һәм яман еҫ кенә тороп ҡалды...

* * *

Күңелендә ҡапыл һәм ҡыҙыҡ ҡына хасил булғайны Ләйләгә һөйөүе. Уның оҙаҡ ваҡыт буйҙаҡ йөрөүенә бигерәк тә Хәлимә инәһе көйҙө.

- Йәшең үтеп бара, кешенән оят. Әсәйең менән һиңә ҡыҙҙар күрһәтә торғас, арып бөттөк. Кем генә оҡшар икән һиңә? Аптыралған баш. Ана, элек ата-әсәләр баланан ризалыҡ та, кәләше оҡшауы-оҡшамауын да һорап тормаған. Никах уҡытҡан да, тегеләр йәшәгән дә киткән. Ана, Гөлсөмдө ал, тип, әсәйең менән күпме тылҡыныҡ. Үҙе булдыҡлы, үҙе уңған. Тыңламаның. Хәҙер ул ҡалаға китеп, эшкә ингән, ҡайтмаҫ инде...

- Миңә Гөлсөм оҡшамай шул, инәй, күпме әйттем...

- Атыу кем һуң күҙ һалып йөрөгәнең? Үҙемә генә әйт, сер итеп кенә тотормон. Берәй кәңәшем дә ярап ҡуйыр...

- Ләйлә ул ҡыҙ, инәй...

- Теге Рәҡит еҙнәңдең ике туған һеңлеһе Ләйлә ҡоҙасаны әйтәһеңме? Зилбәр апайыңдың бикәсеме?

- Эйе...

- Ул һиңә ҡарармы икән, айһай. Рәҡит менән Зилбәрҙең туйы барған саҡта Италияла эш сәфәрендә булып ҡалғайны. Әле ул Рәҡит еҙнәңдең фирмаһында эшләй...

- Беләм...

- Хәҙер үҙенә матурлыҡ салоны асырға ла йөрөй, тиҙәр. Италияла эшләп ҡайтҡан аҡсаһына сит ил машинаһы алып ебәргән. Ауылға шуның менән ҡайтып йөрөй...

- Быныһын да беләм, инәй...

- Белгәсең һуң. Ир кеше ҡатынынан кәмендә бер башҡа, бер башҡа булмаған хәлдә лә, бер кәпәскә бейегерәк булырға тейеш, улым. Ә һинең әлегә кәпәсеңдән, дипломыңдан, көн һайын бахмурҙан ауырыған башыңдан башҡа нимәң бар?..

Айрат уйға ҡалды. Ысынлап та, инәһенең һүҙендә дөрөҫлөк юҡ түгел, бар шул. Кәпәс һәр бер ир-атта бар, дипломға килгәндә инде... Хәйер, уҡыуын тамамлап ҡайтҡас та, йәш белгескә ауылда ҡушҡуллап йәбештеләр. Ир-ат уҡытыусыларға ҡала ғына түгел, ауыл да ҡытлыҡ кисерә. Ә күп кенә ир-аттар мәктәптә эшләүҙе "бисәсәсә эше" тип ҡарай. Айратҡа иһә, ҡайтыуы бер мәктәп директоры вазифаһын тәҡдим иттеләр. Егет бынан баш тартып, ҡалаға китте лә, бер ай ҙа үтмәй, кире уйлап ҡайтҡайны ла, урынды икенсе бер егеткә биреп өлгөргәндәр. Айрат оҙаҡ уйлап тормаҫтан, таҡта бысыу менән шөғөлләнгән шәхси хужалыҡҡа эшкә инеп китте. Унда күбеһе өйләнмәгән егеттәр эшләй. Кистәрен эш бөткәс, ҡайтырға ашыҡмайҙар. Хәбәр һаталар, тәмәке көйрәтәләр, хәрәм эсемлеге лә табылып ҡуя. Ваҡыт үтә килә, Айрат студент сағында ара-тирә генә булашҡан был "шөғөл"гә өйрәнеп үк алды, хатта тәмәкеһеҙ һәм араҡыһыҙ тора алмай ҙа башланы.

Тап шул мәлдә Хәлимә инәһе менән булған һөйләшеү егетте һиҫкәндереп кенә ҡалманы, өйрәнә башлаған алама ғәҙәтенән ҡотолорға сәбәпсе булды. Ул егеттәре менән эсеүҙең, тартыуҙың зарары хаҡында һөйләшеү алып бара ғына башлағайны, Хәкимйән атлы хеҙмәттәше:

- Әгәр ҙә һин, Айрат, иртәгәнән эсмәһәң, тартмаһаң, мин дә һинең менән, - тип шундуҡ уға теләктәшлек белдерҙе.

- Ниңә иртәгәнән, ти, әйҙә бөгөндән, хәҙер үк... - Айрат ошо һүҙҙәрҙе әйтте лә, кеҫәһенән тәмәке ҡабын алып, сүпсар кәрзиненә быраҡтырҙы. Уның һымаҡ, Хәкимйән дә яңы ғына башлаған тәмәке ҡабын ситкә елгәрҙе.

Был көндө Айрат менән Хәкимйән эштән үҙ ваҡытында ҡайтты. Башҡалар "Тәүбәгеҙ күпмегә һуҙылыр икән?", - тигән ҡиәфәттә ултырып ҡалды. Иртәгеһенә икәүгә өсөнсө булып, Фирҙәт тә ҡушылды.

- Мин дә тәмәке һәм көмөшкә һатыусыларҙы байытмаҫҡа булдым, - тине ул ниәте ныҡлы булыуын ҡәтғи белдереп. Ҡалған өс егет тә оҙаҡҡа барманы һәм улар ҙа эш урынында эсмәй башланы. Тәмәке көйрәтеүҙәрен генә иҫәпкә алмағанда.

Тотош бригаданың шундай үҙенсәлекле "таҙарыныу" юлына баҫыуына, шулай итеп, Айраттың Ләйләгә ҡарата мөхәббәте сәбәпсе булды. Эсмәгәс, эштәре лә ырап китте. Таҡта ярыу цехы янында мебель яһау оҫтаханаһы ла асып ебәрҙеләр. Уларҙың ҡулына артыҡ аҡса инде, күңелдәре лә бермә-бер күтәрелеп, дәрт-дармандары арта башланы. Егеттең дуҫтары барыһы ла был аҙымды Айраттың ихтыяр көсөнә бәйләп аңлатырға тырышты, тик егет үҙе генә серҙе Хәлимә инәһенән башҡа бер кемгә лә сисмәне. Килер бер көн, ул был хаҡта Ләйләнең үҙенә аңлатасаҡ. Күҙҙәренә тура ҡарап: "Һин, Ләйләм, беҙҙең ауыл егеттәрен дөрөҫ юлға баҫтырыусы. Мин тәмәке менән араҡынан ҡотолған саҡта һинең исемең менән ант иттем..." - тип әйтәсәк.

Кистәрен эштән ҡайта ла егет, Ләйләнең фотоһына ҡарап, эстән генә ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, татлы уйҙарға сума. Хыяллана торғас, Ләйләнең үҙен күргеһе, янына осоп барғыһы килә башланы.

* * *

Тиҙ генә тәүәккәлләне Айрат. Эшенән бер көнгә генә ял алып, ҡалаға юлға сыҡты. Зилбәр апаһына шылтыратып, хәлде һөйләгәс, уныһы Ләйлә бикәсенең телефон номерын бирҙе. Кәрәҙле хикмәт барыһын да хәл итә, ниәтең генә булһын. Айрат ҡалаға етеп килгәндә үк шылтыратып, үҙен "ҡоҙаң", тип таныштырып, йомошо барлығын әйтеп, Ләйләне төшкө ашҡа кафеға саҡырып та ҡуйҙы. Үҙенең башында төрлө борсоулы уйҙар ҡайнаны. Әгәр ҙә ҡыҙҙың йөрөгән егете булһа, нишләр, ыштанһыҙ малай хәлендә тороп ҡалмаҫмы? Әгәр ҙә барыһы ла Айрат уйлағанса килеп сыҡһа, ҡала тормошона өйрәнгән ҡыҙ ауылға килеп торорға риза булырмы һуң?

Еңел генә һөйләшеп киттеләр. Күбеһенсә Айрат һөйләне, Ләйлә тыңланы. Хәлимә инәһенең әйткәндәрен иҫендә тотоп, егет күберәк ауылда башҡарған эштәре, таҡта бысыу цехы янында яңыраҡ асҡан мебель яһау оҫтаханаһы хаҡында бәйән итте, алған табыштарының дәүмәлен дә әйтергә онотманы, тиҙҙән яһаған мебелдәрен ҡала магазиндарына сығарыуға бәйле ниәттәре хаҡында ла белдерҙе. Һүҙ артынан һүҙ ялғанып, егеттең образы ҡыҙҙың күҙе алдында үҫкәндән-үҫә барҙы. Юҡҡа ғына "ҡыҙ-ҡатын ҡолағы менән ярата", тип әйтмәгәндәрҙер инде. Ҡыҙға ҡарата күңеле һөйөү менән лыҡа тулы егеттең ауыҙынан аҫыл һүҙҙәр ағылды ла ағылды. Баштараҡ: "Йә, нимәгә шулай мине кафеға саҡырмаҡсы булдың, ҡоҙа?" - тигәнерәк ҡиәфәттә ултырған Ләйлә, егетте тыңлай торғас, күңеле йылынып уҡ китте. Ишеткәне бар ине ҡыҙҙың малай сағында Зилбәр еңгәһен һыуға батыуҙан ҡотҡарған Айрат атлы ҡоҙаһының батырлығы тураһында. Ни генә тимә, Айрат быныһы менән Рәҡит ағаһын бәхетле, Ләйләне матур, аҡыллы еңгәле иткән кеше. Быныһы ни өсөн шулай икәнлеген уларҙа фатирҙа торған Ләйлә үҙе яҡшы белә. "Бикәсем, тәмлекәсем", тип Ләйлә өсөн өҙөлөп тора Зилбәр еңгәһе. Хәҙер бына ул батырҙың үҙе менән күҙмә-күҙ осрашты. Башта уҡ ҡыҙ шуны ла тойоп өлгөрҙө: егет уға битараф түгел. Күҙҙәр күпте һөйләй, тел әйтеп еткермәгәнде лә ҡараштар еткерә. Ҡыҙҙы егеттең башҡаларға һис тә оҡшамаған сифаттары: тура һүҙлелеге, етдилеге, ғәҙәттән тыш ябайлығы, ышаныслы мөғәмәләһе әсир итте.

Улар икенсе тапҡыр ҙа ошо кафела осрашты. Был юлы инде ҡыҙ һөйләшелгән ваҡыттан алдараҡ килеп, табынға үҙе заказ бирҙе. Һыныын килтереп, хатта шарап та ҡуйҙортто. Әммә Айрат эсеүҙән баш тартты, улай ғына ла түгел, бергә эшләгән егеттәре менән нисек эсеүҙән ҡотолоуҙары, бында Ләйлә сәбәпсе булыуы хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләне лә бирҙе. "Мин араҡы менән тәмәкенән ҡотолған саҡта һинең исемең менән ант иттем, Ләйлә. Минең өлгөгә башҡа егеттәр ҙә эйәрҙе, хәҙер ауылыбыҙ егеттәренең яртыһынан күберәге эсмәй. Быларҙың барыһы ла һинең өсөн, һинең ярҙамың менән..."

Аҡыллы, зиһенле ҡыҙ өсөн ошонан артыҡ тағы ла ниндәй аңлашыу һүҙҙәре кәрәк инде. Икенсе осрашыуҙан һуң егет ҡыҙҙы ауылға ҡунаҡҡа саҡырып ҡайтты...

* * *

Әсәһе тәмле еҫтәр сығарып бешеренеп йөрөй. Ә Айраттың кәйефе бөтөнләй юҡ. Барыһын да Ләйләнең әсәһе емерҙе. Емереп кенә ҡалманы, егеттең күңелендә яралған өмөт бөрөләрен ыуыҙ көйөнә туңдырҙы уның тупһыҙ һүҙҙәре. Ярай әле, был һүҙҙәрҙе Ләйлә менән Айрат ҡына ишетһә, Хәлимә инәйҙәренә ҡунаҡҡа килгән Зилбәр апаһы менән Рәҡит еҙнәһе лә ишетте. Хәлимә инәһе лә башын тотто. Ҡолап китерлек ине был һүҙҙәрҙе ишетеүе: "Һинең әсәйеңде үҙемә ялсы, атайыңды ат ҡараусы итеп эшкә алайыммы инде, улай булғас?.."

Усаҡта дөрләп янған кәпәсенең көйөк еҫе Айратты, шулай итеп, бер секунд эсендә үҙ асылына ҡайтарҙы ла ҡуйҙы. Юҡ, утта уның кәпәсе түгел, гүйә, ғорурлығы ыңғырашып яна ине. Ләйлә лә, әсәһенең был һүҙҙәрен, Айрат менән буласаҡ аңлашыу ауырлығын күтәрә алмайынса, еңел машинаһына ултырып, ҡалаға ҡайтып китте. Аңҡы-тиңке булып йөрөнө егет, үҙен ҡайҙа ҡуйырға ла белмәне. Бер тоҡанып китте лә: "Эй, миңә уның әсәһе менән йәшәргәме, Ләйлә менән беҙҙең мөхәббәт көслө...", - тип уйлап, ҡалаға китергә йыйынғайны, уны әлеге лә баяғы кәпәстең көйөк еҫе туҡтатты. Булмышына, юҡ, баш мейеһенә инеп ултырҙы ул еҫ. Инеп ултырҙы ла, булмышын бер урынға ҡаҙаҡланы. Әллә инде уның ныҡлығын, ихтыярын, һөйөүен Иблис үҙе һынай, өс көн йоҡоһоҙ үткәргәндән һуң, егет магазинға барып, бер ярты алды ла, бер мөйөшкә боролоп, инде һемерәйем тигәнендә, Хәлимә инәһе ҡулынан тотто.

- Дөрөҫ эшләмәйһең, улым, беткә үс итеп, туныңды утҡа яҡма. Кәпәсең янғаны ла еткән. Олоғая килә, Ләйлә лә әсәһенә оҡшар...

Хәлимә инәһенең ошо һүҙе генә кәрәк булған икән Айратҡа. Күнде был хәленә егет, ҡулындағы шешәһен дә Төйләгән йылғаһы төбөнә елләне. Бер туҡтауһыҙ ҡалаға тартылып торған күңеле лә һүрелде, аяҡтары ул яҡҡа тартмаҫ булды. Шулай ҙа бер көн уйламағанда-көтмәгәндә почта аша Айратҡа посылка килеп төштө. Ләйлә ҡоҙасаһы шәшке тиреһенән тегелгән кәпәс ебәргән икән...

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# КӨЛӘ-КӨЛӘ ...

## һалдат килә

### Шәриғәтсә

Элекке заманда бер ярлы ҡатын, аш табынына балалары ултырышҡас:

- Туйыр-туймаҫ ҡына ашаһаң, сауабы бик ҙур икән. Шәриғәт кәрәгенән артыҡ ашауҙы ҙур гонаһ тип һанай, - тип әйтә торған булған.

Оло улы бер ваҡыт һалдат хеҙмәтенә киткән. Ауылға яҙған хатында: "Әсәй! Мин иҫән-һау. Минең өсөн борсолма. Ашап-эсеү шәриғәтсә генә", - тигән, ти.

### Шинель

Батша заманында бер ҡараңғы ауылда йәшәүсе ҡарт әсә һалдаттағы улына: "Ятҡан-йоҡлаған ерҙәреӊ ниндәй, түшәк-юрғаның ҡаты түгелме?" - тип һорашып хат яҙҙырған.

Һалдат әсәһен тынысландырып, былай тип яуап яҙып ебәргән: "Бүтән ҡайғыларың булмаһа, минең өсөн борсолма, әсәй,- тигән.- Минең хәл ал да гөл: кейгәнем дә шинель, аҫтымда ла шинель, ябынғаным да шинель..."

"Ярай әле, шинелдәрен ҡыҙғанмай күп бирәләр икән", - тип ҡыуанған ҡарт әсә.

### Хәлдәр нисек?

Һуғыш ваҡыты, ти. Берлин урамында немец офицерҙары кейемендә ике кеше осраша. Берәүһе:

- Хайль Гитлер! - тип сәләмләйем, тигәнсә:

- Хәлдәр нисек! - тип әйтеп ысҡындыра. Икенсеһе:

- Аллаға шөкөр! - тип үтеп китә.

Бер-береһе менән таныш булмаған был ике офицер беҙҙең разведчиктар булған, имеш.

### Учение ғына

Фашист һалдаттарының учениеһы бара икән. Самолеттан бер төркөм һалдаттар һикергән. Шул мәл береһе:

- Ярҙам итегеҙ, парашютым асылманы! -тип ҡысҡыра икән.

Икенсеһе:

- Эй, нинә аҡыраһың? Был бит учение ғына, - тигән.

### Ҡыйын хәлдән нисек ҡотолорға?

- Йә, әйт әле, лейтенант әфәнде, һалдаттарыңды йәһәт кенә ҡуҙғатып алып китеү өсөн, һин ниндәй команда бирер инең?

- Минме? Мин, Штагель әфәнде, ундай саҡта: "Ҡыҙыл кавалерия! Башҡорттар килә!" - тип ҡысҡырыр инем...

### Ҡасҡан

- Обер-лейтенант әфәнде, әсиргә төшкән башҡорт разведчиктары ҡасҡан.

- Нисек ҡасҡан?

- Штаб документтары менән бергә генералды әләктереп...

### Көбәктән ни күренә?

- Ҡарағыҙ әле, старшина иптәш, тубымдың көбәгенән берәй нәмә күренәме?

- Күренә.

- Нимә?

- Нәүбәттән тыш ике наряд.

### Йыуатыу

Һалдат:

- Старшина иптәш, парашютым асылмаһа, нишләрмен икән? - тигәс, старшина:

- Складҡа килерһең, мин һинә яңы парашют бирермен, - тигән,ти..

### Мыйыҡ

- Һалдат иптәш, нинә мыйыҡ еткерҙең?

- Старшина, минең күрһәтмәләрҙе мыйығыңа урап ҡуй, тигәйне.

### Башлы һалдат

- Минең дуҫты әйтәм, ну баш та үҙендә!

-Нимә, берәй яңы ҡорал уйлап таптымы әллә?

-Юҡ! Алтмыш өсөнсө үлсәмле бүрек кейә.

### Үҙенең кем икәнен белмәй

Яңы ғына һалдатҡа алынған бер егетте батальон казармаһына дневальный итеп ҡуялар. Ул әлегә хәрби дәрәжә билдәләрен ефрейторҙан алып өлкән лейтенантҡа хәтле генә белә. Бер саҡ казармаға полковник килеп инә. Тәртип буйынса һалдат:

- Бат-тальон, смирно! - тип, команда бирә лә, тып-тып атлап, полковник алдына килеп баҫа.

- Иптәш кесе лейтенант!

- Юҡ, мин кесе лейтенант түгел, - ти полковник, көләмһерәп.

- Иптәш лейтенант! - тип әйтеп ҡарай, аптырап ҡалған һалдат.

- Мин лейтенант та түгел.

- Иптәш өлкән лейтенант!.. - ти һалдат, күҙен селт-селт йомоп.

- Мин өлкән лейтенант та түгел.

Һалдат асыуланып китә лә яңы команда бирә:

- Бат-тальон, отставить! Үҙенең кем икәнен дә белмәгән бер әҙәм алдында бөтә казарманы смирно тотоп булмаҫ инде!

### Әсиргә алмаҡсы

Офицер:

- Нинә бер пуляң да сәпкә теймәгән?

Һалдат:

- Ә мин уны әсиргә алырға булдым.

### Бер генә ҡарындашлы һалдат

- Һеҙ рядовой Дәүләтшин янына килдегеҙме?

- Эйе, мин уның берҙән-бер генә ҡарындашымын.

Ай, әттәгенәһе! Бик үкенесле хәл! Бер сәғәт элек кенә ул увольнениеға икенсе "берҙән-бер" ҡарындашы менән сығып киткәйне бит әле...

### Устав буйынса

Күперҙән китеп барған лейтенантҡа бер һалдат честь бирмәй үтә. Лейтенант уны туҡтата:

- Һалдат иптәш! Ну-ка вернись! Нинә честь бирмәйһегеҙ?

Һалдат, смирно баҫып, яуап ҡайтара:

- Лейтенант иптәш, күпер өҫтөндә честь бирергә ярамай.

- Нисек ярамай?

- Хәрби тәртип уставының фәлән параграфы, фәлән пунктында шулай тип әйтелгән, - ти һалдат. Офицер бер аҙ уйланып тора ла:

- Ярай, китегеҙ,- тип һалдатты ебәрә. Үҙе: "Нишләп ул пунктты онотҡанмын икән?" - тип аптырай. Ҡайтып, уставтағы теге пунктты ҡараһа, ни күрә! Унда: "Һалдат бер ҡасан да юғалып ҡалырға тейеш түгел", - тип яҙылған була.

### Мәсәлимов һүҙ һорай

- Ҡара әле, рядовой Мәсәлимов та ҡул күтәрә. Ике йылға тәүге тапҡыр һүҙ һорауы.

Йыйылышты алып барыусы:

- Һүҙ Мәсәлимов иптәшкә, - тип әйтеүе була, Мәсәлимов:

- Йыйылышты ябырға тәҡдим итәм, юғиһә киске ашҡа һуңлайбыҙ, - тигән.

### Репетиция

- Һин тағы, һорамай, ҡалаға сыҡҡанһың?

- Минә үҙ ролемде яҡшылап өйрәнергә кәрәк бит.

- Ниндәй роль ул?

- Спектаклдә тәртипһеҙ һалдат ролен уйнаясаҡмын мин.

Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ әҙерләне.

БЕР ХӘРЕФ ХИКМӘТЕ

# ҠЫҘҘАР ҠЫҘЫЛҒА ҠЫҘЫҒА

## (Ҡарт ҡорсаңғы ҡаңғырыҡы)



Ҡайҙа ҡарама, ҡалаларҙа, ҡасабаларҙа ҡараштарыңды ҡамаштырырлыҡ ҡыҙҙар! Ҡыҙҙарҙың ҡайһыһына ҡараһаң да, ҡыуанып ҡуяһың. Ҡанатланаһың. Ҡайһылары ҡупырыҡ, ҡыйпысыҡ, ҡайбере ҡыян, ҡайһылары ҡыйыуҙың да ҡыйыуы, ҡайһылары ҡыйыуһыҙҙың да ҡыйыуһыҙы. Ҡайһыныһы ҡыйғас ҡара ҡашлы, ҡабаранҡы, ҡупшы, ҡарап-ҡарап ҡына ла ҡәнәғәтләнерлек, ҡәһәрҙәрең. Ҡыҙыҡмай ҡалайтаһың? Ҡыҙҙарҙың ҡыланғандарын ҡәҙимге ҡараным. Ҡарап ҡына ҡалманым, ҡырҡлап ҡына ҡыҙҙы ҡармаҡлап ҡарағанмындыр. Ҡараманылар, ҡармағыма ҡапманылар, ҡаңғылдап-ҡаңғылданылар: "Ҡартһың, ҡомоң ҡойолған, ҡөҙрәтең ҡайтҡан, ҡаңғыртма, ҡартлас. Ҡыҙҙарға ҡарағанса, ҡатындарҙы ҡармаҡла..."

Ҡыҙҙар ҡыҙылға ҡыҙыға! Ҡыҙылдан ҡапланып, ҡарпыш ҡолаҡтарымды ҡайсылап, ҡыланып ҡараһам да, ҡыҙҙар ҡараманы. Ҡыҙыҡманылар ҡыҙыл ҡатама ҡыҙҙар, ҡарпыш ҡыҙыл ҡолағыма, ҡолғалай ҡиәфәтемә лә ҡараманылар. Ҡыҙҙар ҡарамағас, ҡатындарҙы ҡармарға, ҡороҡларға ҡубарылдым.

Ҡатындар ҙа ҡыҙыҡ ҡыналар. Ҡыйыуыраҡтарына ҡыйып ҡарарға ҡурҡам. Ҡайһыларына ҡартлыҡ ҡарасҡыһы ҡунһа ла, ҡупырайып-ҡуҡыраялар. Ҡартасаһенең ҡартәсенән ҡалған ҡиммәтле, ҡараштарыңды ҡамаштырыр ҡаптырмалы ҡашлы ҡашмаулы ҡатын Ҡанита ҡыуаныпмы ҡыуанды. Ҡаптым ҡармаҡтың ҡандайына! Ҡашмаулы ҡатын ҡырҡ ҡабат ҡабатлай: ҡасан, ҡайҙа, ҡайһы ҡыуыушта ҡауышабыҙ, ҡөҙерлем, ҡарлуғасым? Ҡайҙа ҡиммәтле ҡағыҙҙарың? Ҡайҙа ҡалын-ҡалын ҡалымың? Ҡуйҙарың, ҡайнына ҡамсат ҡолаҡсының, ҡәйнәң ҡамалығың, ҡәйнештәреңә ҡәнәфиҙәрең, ҡайынбикә-ҡайнағаларыңа ҡүрнестәрең ҡайҙа?..

Ҡанитаның ҡиммәтле ҡашмауын ҡапшап ҡына ҡарағайным: "Ҡараҡ! Ҡарауыл! - ҡысҡыра, ҡәһәрең. Ҡыҙыҡһынып ҡына ҡапшаным да. Ҡолағына ҡиммәтле ҡағыҙҙар, ҡалын-ҡалын ҡалымдар, ҡуйҙар, ҡайныма ҡамсат ҡолаҡсын, ҡәйнәмә ҡамалыҡ, ҡәйнештәремә ҡәнәфиҙәр, ҡайынбикә - ҡайнағаларыма ҡүрнестәр ҡатып, ҡыҫып ҡосаҡлағайным, ҡарышманы ҡатын. Ҡараңғыла ҡарпыш ҡолағыма ла ҡабарынманы. Ҡарт ҡуйынындағы ҡаласҡа, ҡар ҡатындың ҡашмауына ҡыҙығып, ҡалтайып ҡаҡшаным.

Ҡалайтаһың. Ҡара ҡашлы ҡарт ҡатынды ҡосаҡлағансы, ҡыҫҡылағансы, ҡәнәфиемдең ҡырҙарын ҡосаҡлармын ҡыҫып. Ҡашмаулы ҡатындың ҡыланыштарына ҡаҡшап, ҡабаттан ҡыҙыҡмаҫҡа ҡат-ҡат ҡабатлай ҡайттым ҡыуышыма. Ҡайһыларының ҡамауҙарынан ҡасып ҡотолғоһоҙ, ҡоромағырҙар. Ҡарт ҡуйынындағы ҡаласҡа ҡыҙыҡҡансы, ҡыҙ ҡуйынындағы ҡамсыға ҡыҙыҡ. Ҡыҙыуырһың да, ҡыҙыҡмай ҙа, ҡурлы, ҡотло, ҡөҙрәтле, ҡеүәтле ҡырҡмышлыҡтан ҡырҡылғасың. Ҡомоң ҡойолғас...

Лилиә ҠӘЙЕПОВА.

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

# ТАНЫНЫЛАР

Өлкән малайыма алты йәштәр самаһы булғандыр, икәүләп Салауат һәйкәленә китеп барабыҙ. Улым арттараҡ килә, ә алдан ике йәш кенә ҡыҙ беҙгә табан атлай. Эргәмә килеп еткәс, танынылар ҡыҙҙар, баш һелктеләр ҙә, йылмайышып һөйләшәһөйләшә, уҙып киттеләр. Уларҙың һүҙҙәре ҡолағыма салынып ҡалды: "Артист Абушахманов китеп бара",- тиҙәр. Ул ваҡытта театрҙа студенттар бик күп йөрөй торғайны. Улар артист халҡын яҡшы белә ине.

Бер ваҡыт малай арттан ҡысҡыра:

- Атай, атай, тороп тор әле?

- Нимә булды, улым? - Мин уның килеп еткәнен көтөп тороп, һорарға ашығам.

- Атай, мине танынйҙар икән!..- Үҙенең күҙҙәренән шатлыҡ осҡондары сәсрәп тора.

- Нимәнән сығып әйтәһең быны улым?- тип юрамал һораған булам.

- Ана-а-у ике апай китеп бара бит әле, шулар мине таныны, Абушахманов китеп бара, тиҙәр...

Мин рәхәтләнеп көлдөм дә:

- Шәп кешеләрҙе танийҙар инде, улым, һин һәйбәт малай бит, - тиген булдым.

Улым, ат менгән Салауаттай, һәйкәлгә табан йүгерҙе.

Бөгөн дә шул улым менән ҡайһы саҡта урамдан йәнәш атлап барырға тура килә. Ҡаршы килгән ҡыҙҙар улымды танийҙар: "Ана, башҡорт театрының режиссеры Абушахманов ниндәйҙер бер оло кеше менән китеп бара", - тип, бышылдап һөйләшеп үтеп китәләр. Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, нишләптер, күңелгә моңһоулоҡ ҡатыш шатлыҡ тула...

Әхтәм АБУШАХМАНОВ.

✓ ***Йыр мәғәнәле булырға, уны тыңлаған кеше үҙенә зауыҡ, рухи ҡәнәғәтләнеү алырға тейеш. Ә был замана йырҙарынан ниндәй ҡиммәттәр алаһың?***



...ЙЫРҘАР ЙЫРЛАЙ



**Һуңғы арала бигерәк күбәйеп киткән йәш йырсылар башҡарыуында заманса бер нисә йыр тыңлағандан һуң, ҡулыма ҡәләм алырға мәжбүр булдым. Эйе, Мәрйәм апай Бураҡаеваның "Киске Өфө"нөң һуңғы һандарының береһендә баҫылып сыҡҡан йән әрнеүенә ҡушылмай сара юҡ: "Матур, һутлы, һығылмалы, яғымлы, иҫ китмәле бай телебеҙ, ысынлап та, сүпләнә һәм ярлылана".**



# МӨХӘББӘТТЕ АҢЛАТҠАНДА...

## грамматикаға һыйып булмай, имеш

Юҡ, өмөтлө йәш быуынға һүҙ тейҙереү уйымда ла юҡ! Афарин, бик актуаль "проблемалар" тураһында йырлайҙар, заман менән бергә атларға тырышалар:

*Мин ауылда һуңғы кеше түгел әле -*
*Бар "копейка"м һәм телевизор в зале.*
*Бәҙ(е)рәфтә ултырғанда мин уйлап алғайным*
*Кабельное үҙемә үткәреп алайым…*

*(Зиндан).*

Йә булмаһа:

*Әгәр һин булмаһаң, донъяға тыумаһаң,*
*Кемдер үкенер ине.*
*Путин үлмәҫ ине, ҡояш һүнмәҫ ине -*
*Йөрәгем һүнер ине.*

*(Ренессанс).*

"Бүреләр" ансамбленең һуғышты ҡәһәрләүе, тыныс тормошҡа саҡырыуы аңлашыла, әлбиттә, тик һөйләмдә ҡулланылған һүҙҙәрҙең формалары ғына бик аңлашылып етмәй:

*Арыным мин әсәйҙәрҙең күрергә күҙҙәр йәштәрен…*

Йәшлек, саф хистәр донъяһы... Йәш йырсылар репертуарында мөхәббәт иң мөһим темаларҙың береһе булып тора:

*Һөйәм һине һәр көн һайын таң атҡанда,*
*Тик һин генә уйҙарымда ҡояш батҡанда…*

*(Замана).*

*Йәшәйем, тип типкән нескә йөрәгеңде*
*Туҡтатаһың, күтәрәйем, тип кәйефеңде…*

*(Замана).*

Шундай ялҡынлы хистәр даръяһында йөҙгәндә, әлбиттә, һүҙҙәр бутала, мәғәнә тигән төшөнсә онотола:

*Һин - мөхәббәтем, йөрәккәйем минең тик һиндә,*
*Йәнем, һөйгәнем, янымда булырға һәр көндә*
*Һин - мөхәббәтем, теләйем, бәғерем гел генә*
*Йәнем, һөйгәнем, ғашиҡмын, һылыуым, мин һиңә…*

*(Р. Юлъяҡшин)*

(Башҡорт теленең грамматикаһына ярашлы итеп тыныш билдәләре ҡуйырға тырышып ҡараныҡ, тик һөҙөмтәһеҙ: һөйләмдең ни башын, ни аҙағын таба алманыҡ).

Күңелдә ҡайнаған хис-тойғо, теләктәрҙе бөтә нескәлектәрендә һөйгән йәргә еткереү өсөн хатта бер телдәге һүҙҙәр етмәй башлай, "ярҙамға" башҡа телдәргә мөрәжәғәт итергә тура килә:

*Кис урамға мин сыҡтым, дуҫымды ос(ы)раттым.*
*Әйҙә, киттек уйынға, короче, дискотекаға…*
*… Һине хочу үҙемә ҡаратырға,*
*Һине хочу ныҡ ҡына яратырға,*
*Һине хочу ирендәреңдән үбергә,*
*Һине хочу, короче, мин һине хочу!*

*(Р. Юлъяҡшин).*

*Оҙаҡ уйламай, ошо урында аңланым мин:*
*Получается отшиваешь мине һин*

*(Dany).*

Иң ахырҙа йәш йөрәк хистәр даръяһын үҙенә һыйҙырып бөтә алмайынса, ҡайһы берәүҙәрҙең ҡанында (?), икенселәрҙең эсендә (ҡорһағында?) тулап тибә башлай:

*Әйҙәгеҙ, бергәләшеп йырлайбыҙ,*
*Әйҙәгеҙ, бергәләшеп уйнайбыҙ.*
*Шундай һылыу ҡыҙҙар барында*
*Йөрәк тиҙ(е)рәк тибә ҡанымда.*

*(Айтуған).*

*Буйым бәләкәй булһа ла, эй һылыуҡай,*
*Йөрәккәйем минең елле - эсемә һыймай!*

*(И. Абдрахманов).*

Ҡайһы бер йырсыларҙың нәмә тураһында йырлауын күҙ алдына килтерә башлаһаң, сәстәрең үрә торорлоҡ:

*Егеттәр, ултырмайыҡ бөгөн кис,*
*Ҡыҙҙар, ысҡынайыҡ бөгөн кис…*

*(MC FIL).*

*Матур, сибәр, һылыуҙар*
*Бейейҙәр, ысҡыналар,*
*Мөхәббәт ялҡындарын*
*Йөрәктә тоҡандыралар.*

*(Dany).*

*Бер ҡыҙ бейей, ысҡына -*
*Оҡшаның һин ныҡ ҡына,*
*Күҙ алдымда һин генә,*
*Бер кем кәрәкмәй миңә*

*(Р. Юлъяҡшин).*

Халыҡта "бәйҙән ысҡынған эт" тигән һүҙбәйләнеш бар барлығын. Киске уйындарҙа, дискотекаларҙа күңел асҡан "матур, сибәр, һылыу" ҡыҙҙарҙы шул рәүешле сағыштырыу, тип аңларға кәрәктер, күрәһең... Бәлки, улар берәй ҡағып йә бәйләп ҡуйылған ерҙән ысҡынып төшәләрҙер...

*Көн дә мин кишер ашайым*
*Кәбеҫтә менән бергә…*

*(И. Абдрахманов).*

Был юлдарҙы тыңлаған һәр кем кәбеҫтә менән бергәләп кишер ашап ултырған И. Абдрахмановты күҙ алдына килтергәндер.

*Тирә-йүнеңдә егеттәр йүгерә,*
*Һәр береһе аяғың аҫтында мөхәббәтен белдерә…*

*(Инсан).*

Ә был йыр юлдарын тыңлағас, мөхәббәт тулы күҙҙәренде һөйгәненә төбәп, ҡулдарынан тотоп, йә булмаһа, йөрәгенә ҡыҫып, яратыуынды белдереүҙәр шулай уҡ иҫкереп артта ҡалдымы икән ни, тип уйлап ҡуяһың. Ҡыҫҡаһы, заманса йырҙарҙа һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә иғтибар итеү юҡ, бәғзе берәү йырлағанса:

*Бөгөн кис беҙ ял итәбеҙ, рәхәтләнеп көләбеҙ.*
*Алла бирһә, иртәгә лә бергәләшеп бейербеҙ.*
*Был йырҙың матур һүҙҙәрен хәҙер берәү аңламай,*
*Тик ошо көйгә генә бейейек, давай-давай!*

Бына шулай кемуҙарҙан туған телебеҙҙе грамматик хаталы һүҙҙәр, варваризмдар, жаргондар менән тултырабыҙ. Бынан тыш, заманса йырҙарға төрлө сүрәләрҙе ҡушып йырлау киң таралған. Йәш быуындың Ҡөрьән сүрәләрен белеүе яҡшы ла, тик һәр нәмәнең үҙ урыны булырға, изге һүҙҙәр, доғалар изге Алла йорттарында яңғырарға тейештер.

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП…

**Тағы ла ҡатын-ҡыҙҙарға һүҙ бирәйек. Бындай йырҙарҙың күбеһе һөйөүгә, тимәк, ҡыҙ-ҡатындарға төбәлгән бит. Әммә тыңлаймы икән уларҙы ҡыҙ-ҡатындар?**

**Сулпан МӘҮЛИТОВА:** Эстрадабыҙҙың шундай кимәлгә төшөүендә бер егеттәрҙе генә ғәйепләп булмай. Ихтыяж тәҡдимде билдәләй, тимәк, был йырсыларҙы тыңлаусылар, ҡабул итеүселәр бар. Ә һүҙҙәренә килгәндә, ысынлап та, ҡот осҡос! Әҙ генә уйланырлыҡ аҡылы, донъяға үҙенең фекере, ҡарашы булған кеше ундай йырҙарҙы бөтөнләй ҡабул итмәҫ ине. Шулай уҡ бер ниндәй ата-әсә лә балаларының был йырҙарҙы тыңлауын теләмәйҙер. Йыр мәғәнәле булырға, уны тыңлаған кеше үҙенә зауыҡ, рухи ҡәнәғәтләнеү алырға тейеш. Ә был замана йырҙарынан ниндәй ҡиммәттәр алаһың? Шул минутында ғына уға һикерәнләп бейеп алырға мөмкин, шул минутында ғына ул һинең кәйефеңә ниндәйҙер кимәлдә йоғонто яһайҙыр, бәлки. Ә былай алғанда, ул йырҙарҙы тыңлағаныңдан тыңламағаның яҡшыраҡ.

Беҙҙең йәштәрҙең дә ошо йырҙарҙы үҙләштереүе күңелде төшөрә. Шуны йыр итеп, эстрадаға сығарыу беҙҙең сәнғәт кимәлен түбәнәйтә. Шоу- бизнес, тип ауыҙ тултырып һөйләһәләр ҙә, беҙҙең милләт өсөн бының ыңғай яғын күрмәйем. Етмәһә,"Аманат", "Йәншишмә" гәзиттәрен уҡыһаң, үҫмерҙәр үҙҙәренең кумиры итеп шул йәш йырсыларҙы күрһәтә. Кумир булһа, кеше уға ынтылырға, оҡшарға тырыша, шуға күрә үҫмерҙәрҙең шул кумирҙарына оҡшарға тырышыуынан ҡурҡам. Тормошта беҙ уларҙың үҙҙәрен нисек тотоуын, ниндәй ҡиммәттәрҙе өҫтөн ҡуйыуын белмәйбеҙ. Шуға күрә, йәштәрҙе был яңылыш ҡараштарҙан ҡотҡарырға кәрәк. Илгиз Абдрахмановтың эстраданан китеп, дингә килеүен ишеткәс, шул тиклем ҡыуандым. Дөрөҫ юл һайланы. Афарин!

**Рәсимә АЛТЫНБАЕВА:** Ниңә шундай йырҙарҙы йырлайһығыҙ, тип егеттәрҙең үҙҙәренән һорарға кәрәк ине ул. Нимә тип яуап бирерҙәр ине икән? Бындай йырҙарҙы йырлаған йырсыларҙы нимә илһамландыра? Минеңсә, был егеттәрҙең ҡыҙҙарға һөйөү белдереү кимәле лә "һине хочу"нан артмайҙыр инде. Уларҙы ысын йырсы, тип һанамайым, улар аҡса өсөн сәхнәгә сыҡҡан студенттар, йәки бер-ике көнлөк әртистәр генә, сөнки күпмелер ваҡыт үткәндән һуң улар барыбер онотоласаҡ. Шуныһы үкенесле, уларҙы тыңлап үҫкән быуын күп ҡиммәттәрҙән мәхрүм ҡала. Хәҙерге быуын былай ҙа рухи яҡтан ярлы. Үҙебеҙҙе уйлаһам, беҙҙең үҫмер саҡтарыбыҙ улай уҡ ярлы булмаған. Беҙ "Каруанһарай", "Ант" кеүек төркөмдәрҙе тыңлап үҫтек. Уларҙан беҙ рух та, моң да алғанбыҙ.

Әлеге йәш "йондоҙҙар"ҙың төп маҡсаты - аҡса эшләү. Минең уларҙы ысын башҡорт егеттәре, тип атағым да килмәй. Ә бына МС Баштың Рәми Ғарипов һүҙҙәренә йырлаған ҡобайыры миңә оҡшай. Башҡа йәш йырсыларҙың да йырҙарында башҡорт колориты булһын ине, мәҫәлән, ҡумыҙ, ҡурай менән аранжировка эшләһендәр, милли музыкаль инструменттарҙы пропагандалаһындар.

Ун йыл үткәндән һуң йәштәр нимә йырлар икән? Мин тиҙҙән сәхнәлә бөтөнләй тере тауыш менән йырлаусылар бөтәр ул, тип тә уйлап ҡуям. Хәҙер компьютерҙа тауышты үҙгәртеп була, күптәре әле үк фонограмма менән йырлай. Был йырҙар кешене уйландырмай, рухи ҡәнәғәтлек бирмәй, ә бары йәштәрҙе боҙа ғына.

**Рита ТИМЕРҒӘЛИНА:** Мин был йырҙарҙы бөтөнләй тыңламайым, ә тыңларға тура килгәндә, аптырауҙан телһеҙ ҡалам. Йәштәр үҙҙәре йырҙарының мәғәнәһенә төшөнмәй, уйламай йырлай микән? Был егеттәрҙә, бәлки, рух та барҙыр ул. Беҙ ҡәтғи рәүештә уларҙы битәрләп тә ташларға тейеш түгелбеҙҙер. Бәлки, үҙҙәренсә башҡортса йырлап, йәштәрҙе башҡортса йырларға өйрәтәләрҙер. Әгәр шулай була ҡалһа, йәш йырсылар менән һөйләшергә, кәңәштәр бирергә кәрәктер. Мәҫәлән, йырҙарҙың һүҙҙәрен матурларға, музыкаларына ла халыҡсанлыҡ индерергә, тигән кәңәштәрҙе улар ҡабул итер ине, тип уйлайым.

Йәштәр һәр ваҡыт танылыу яуларға тырыша. Әллә хәҙерге заман йәштәре ошо ҡылыҡтары менән мода артынан эйәрергә, танылыу яуларға, ошо ысул менән йәштәрҙе йәлеп итергә тырыша микән?

Белмәйем, аптырайым... Үҙем был йырҙарҙы тыңламауҙы өҫтөн ҡуям.

**Зәкирә АБДУЛЛИНА яҙып алды.**

...ӘРМЕЛӘ ХЕҘМӘТ ИТӘ

**Ир-егеттәр тураһында һөйләгәндә, әрме темаһын урап үтеп булмай бит инде. Етмәһә, Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан сыҡҡан был һаныбыҙҙа аҙмы-күпме шуға арнауҙар ҙа бар. Шуға ла ҡасандыр әрмелә хеҙмәт иткән ир-егеттәргә: "Ир-егеттәргә ысынлап та әрмегә барырға кәрәкме?" тигән һорау биреп, был ғәмәлдең тормошобоҙҙағы ролен раҫлатып ҡуймаҡсы булдыҡ әле.**



# ЙОЛАҺЫ ШУЛ:

## һалдат һурпаһының тәмен таты

**Рәйес ҠОТОШОВ, тарихсы:** Беҙ үҫкән ваҡытта әрме егеттәрҙең иң изге бурысы булып һанала торғайны, ә әрменән ҡасып ҡалыу ҙур хурлыҡ ине. Мин үҙем малай саҡтан диңгеҙ флотында хеҙмәт итергә хыяллана торғайным, сөнки үҙемдең армиянан флот кейемендә ҡайтып төшөүемде күҙ алдына килтерһәм, ниндәйҙер ғорурлыҡ тойғолары уяна торғайны. Армияға саҡырылып, Ленинградҡа эләккәс, башта хәрби янғын һүндереүселәр мәктәбендә уҡырға тура килде. Гел бишкә генә уҡығанға күрә, миңә артабан ҡайҙа хеҙмәт итеүҙе һайлау хоҡуғы бирелде. Мин, әлбиттә, диңгеҙ авиацияһын һайланым. Тәүҙә Калининградта, унан Белоруссияла хеҙмәт иттем. Армияла һәр профессия ҡиммәтле. Хәрби янғын һүндереүселәр мәктәбендә уҡығанға күрә, янғын һүндерергә лә йөрөнөк. Ә төп бурысыбыҙ - самолеттар осҡан ваҡытта хәүефһеҙлек һағында тороу ине. Шулай итеп, әрме хеҙмәтенән мин бер профессия алып ҡайттым. Гражданкаға ҡайтҡас та был профессияны дауам итеү мөмкинлеге булды, әммә мин әрмегә тиклем үк үҙем хыялланған ергә -БДУ-ның тарих факультетына уҡырға индем.

Әрме егеттәргә ышаныс көсө алыр өсөн кәрәк. Беренсенән, унда тәртипкә, мәҫәлән, ололарҙы хөрмәт итергә, кеселәрҙе хәстәрләргә, егеттәр менән дуҫлашырға, уртаҡ тел табырға, икенсенән, вакытыңды дөрөҫ бүлергә, йәғни көндәлек эш планын төҙөргә өйрәнәһең. Әрменән үҙеңде ысын ир-егет тип тойоп ҡайтаһың. Әрмелә хеҙмәт иткәндән һуң йөрәктә тыуған ил алдында, ата-әсә алдында яуаплылыҡ тойғоһо уяна. Әрме үҙенә күрә бер тәрбиә мәктәбе ул, уның төп файҙаһын ошонда күрәм. Әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡан кеше һәр төрлө хәлдәрҙә лә юғалып ҡалмай. Шуға күрә егеттәргә, әрмегә мотлаҡ барығыҙ, әрменән ҡасмағыҙ, тип әйтер инем.

**Марат ТУЛЫБАЕВ, хеҙмәткәр:** Беҙҙең йәшлек 80-се йылдарға тура килде. Ул ваҡытта Рәсәй әрмеһе тыныс түгел ине. Мин әрмегә саҡырылғас, Мәскәү ҡалаһында сержанттар әҙерләү мәктәбендә 6 ай уҡығандан һуң, Чехословакияға ебәрҙеләр. Аҙаҡҡы йыл ярымды ғәскәрҙәрҙең үҙәк төркөмөндә хеҙмәт итеп ҡайттым.

Әрме егеттәргә нимә өсөн кәрәк? Әҙерлек мәктәбендә булған саҡта һәр һалдат беренсе булырға тырыша, бөтә хәрби уставтарҙы ятлай, винтовканы яҡшы итеп тоторға өйрәнә, нисек тә алдынғылыҡты бирмәҫкә тырыша, йәғни унда лидерлыҡ һәләттәре үҫешә. Һуңынан әҙерлек мәктәбенән хәрби бүлеккә барғас, һалдаттарҙы ойоштороп йөрөргә тура килә. Был осраҡта һинең ойоштороу һәләтең барлыҡҡа килә. Ә төрлө хәрби эштәрҙе үтәгән саҡта һалдатта яуаплылыҡ, тиҙ ҡарар ҡабул итеү, тоғролоҡ кеүек сифаттар үҫешә. Көн һайын үткәрелгән күнекмәләрҙә һалдат көс йыйып ҡына ҡалмай, унда алға ынтылыш, рухи көс барлыҡҡа килә. Әгәр һине рәнйетергә маташыусы кешеләр булһа, үҙеңде яҡлап сығырға, ныҡ булырға, бирешмәҫкә өйрәнәһең. Әрме бешмәгәндәрҙе яратмай, ниндәй генә хәл килеп тыуһа ла, һин һәр ваҡыт үҙеңде яҡлап сығырға тейешһең.

Бөгөн мәғлүмәт саралары әрме тураһында әллә низәр яҙып бөтә, шул арҡала халыҡ араһында әрме тураһында төрлөсә фекер йөрөтөүселәр барлыҡҡа килде. Әрмелә булғаныма 30 йыл ваҡыт үтеп тә киткән, шуға күрә, бөгөнгө көндә ысын әрме тормошо нисек икәнен әйтә алмайым. Шулай ҙа һәр егеткә әрмегә барып ҡайтыу мотлаҡ, тип һанайым.

**Данил ҠОТЛОБАЕВ:** Аллаһы Тәғәләнең китабы изге Ҡөрьәндә ир-егеттең бурысы - тыуған илде һаҡлау, тип яҙылған, шуға күрә әрмегә барып хеҙмәт итеп ҡайтыу һәр ир-егеттең изге бурысы, тип һанайым. Әрме - егеттәр өсөн һынау осоро, унда егет кеше башҡалар алдында юғалып ҡалмаҫҡа, үҙен кеше булараҡ иҫбат итергә өйрәнә. Тормошта бит хатта физик һәм рухи яҡтан көслө егет тә үҙен иҫбат итә алмауы мөмкин. Ә әрмелә егеттәр балалыҡтан сығып, рухи яҡтан да, физик яҡтан да көсәйеп, ысын ир-егет ҡорона инеп ҡайта.

Дөйөм алғанда, әрмелә хеҙмәт итеү егеттәргә кәрәк, төрлө осраҡтарға һылтанып, унан ҡасып ҡалырға ярамай. Ир-егет тыуған илде һаҡларға тейеш, тигән төшөнсә борон-борондан беҙҙең ҡаныбыҙға һеңгән. Бөгөнгө көндә әрме бөтөнләй икенсе, ул тыуған илде һаҡлау ғына түгел, тиһәләр ҙә, минеңсә, барыбер беҙ уны йола кеүек ҡабул итергә тейешбеҙҙер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кем менән генә һөйләшмә, әрмелә хеҙмәт итеү һәр һалдаттың тормошонда онотолмаҫ хәтирә булып һаҡлана, сөнки әрменең үҙенә генә хас йолалары, ҡыҙыҡтары, мәҙәниәте бар. Изге бурыстарын үтәп ҡайтыусылар әрме тураһында ғорурланып та, ирен ситенән йылмайыу менән дә хәтерләй, хатта ундағы "бабайлыҡ" күренештәре лә һәр ир-егет үтергә тейешле һынау булараҡ баһалана. Тимәк...**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

МАҠТАУ ҺҮҘЕ

## ИЛЕНӘ ЛӘ ТЕРӘК,

### ғаиләһенә лә таяныс

Минеңсә, ир кеше көслө, иленә терәк, ғаиләһенә таяныс булырға тейеш. Миңлеғәфүрҙе мин тап шундай ир-азамат булараҡ беләм, шуның өсөн хөрмәт итәм һәм яратам.

Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙға иғтибарлы булырға тейеш. Ул бер ҡасан да матур һүҙҙәр йәлләмәй, сәскәләр бүләк итеп тора, ата-әсәйҙәргә, туғандарға ҡарата ла иғтибарлы. Балаларҙы ла бергәләшеп тәрбиәләйбеҙ. Шаян телле, баянда, гармунда ла уйнап ебәрһә, бар халыҡты ауыҙына ҡаратып ҡуя. Ҡумыҙ сәнғәтен юғары кимәлгә күтәреү өсөн бар тырышлығын һала. Яҡшы ғаилә башлығы, атай ғына түгел Миңлеғәфүр, һәләтле педагог та. Уҡыусылары уны ҡаршы сығып ала, оҙатып ҡала, бөгөн һәр уҡытыусыға шундай мөғәмәлә эләкмәйҙер ул.

Улыбыҙ Азамат та класында иң яҡшы егеттәрҙең береһе, уҡыуҙа ла һынатмай, ҡурай, бейеү, каратэ менән шөғөлләнә. Уның, атаһына оҡшап, тиҙ генә уйлап эшләп ебәрә торған һәләте миңә бигерәк оҡшай. Тормош иптәшем һәм улым менән ғорурланам. Ҡыҙым менән улар янында үҙебеҙҙе ышанысլы һәм яҡлаулы итеп тоябыҙ.

**Гөлгөнә ЗӘЙНЕТДИНОВА.**
**20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы.**

ҺҮҘ АРАҺЫНДА

## АТАЙҘАРЫ ТУРАҺЫНДА...

### балалар нимә уйлай?

**6 йәштә:** "Атайым бөтәһен дә белә".

**10 йәштә:** "Атайым күп нәмә белә".

**15 йәштә:** "Атайым белгәнде мин дә беләм".

**20 йәштә:** "Атайым артыҡ күп нәмә белмәй, ахыры".

**30 йәштә:** "Атайым менән кәңәшләшеп алыу насар булмаҫ ине".

**40 йәштә:** "Нимә генә булһа ла, атайым бер аҙ аңлай".

**50 йәштә:** "Атайым бөтәһен дә белә".

**60 йәштә:** "Эх, атайым иҫән булһа ине... Мин уның менән кәңәшләшер инем".

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Мөғжизәне ситтән түгел, үҙеңдән эҙлә

Сабый сағыңда һин үҙеңдең шәхси ихтыяжың, теләктәреңдән башҡа бер нәмә лә белмәйһең. Әгәр һин асығаһың йәки түшәгеңде алыштырырға кәрәк икән, атай-әсәйеңдең йоҡлап ятыуын, йә булмаһа, үҙҙәренә ашап алырға кәрәклеген дә уйлап тормайынса, теләгән әйбереңде таптырыуыңды беләһең. Үҫә төшөп, йәшәүгә кәрәкле булған ихтыяжыңдың ҡәнәғәтләндерелеүенә ышаныс туплағас, һин үҙеңде уратып алған донъяның башҡа аспекттарына ынтыла башлайһың. Сабый баланың аяҡ йәки ҡул бармаҡтары менән уйнағанын күргәнең бармы? Һин дә үҙ ваҡытында тап шулай эшләгәнһең һәм үҙеңде уратып алған физик донъяны бер ни тиклем танып белгән һайын, үҙеңдең өйрәнеүеңде дауам иткәнһең. Балалыҡ йылдарында, нигеҙҙә, атай-әсәйең күрһәтмәһе буйынса ҡыҙыҡһынһаң, мәктәпкә уҡырға барғас, уҡытыусылар өйрәткәне менән ҡыҙыҡһына башлайһың. Үҫмер саҡта иһә, тиҫтерҙәрең һинең турала ни уйлауы менән мәшғүлһең. Өлкәнәйгәс, үҙеңде ҡәнәғәтләндергән йәшәү рәүешен булдырыу өсөн бик күп яҡшы мөмкинлектәргә эйә булаһың. Һанап үтелгән һәр үҫеш баҫҡысы һине үҙең өсөн яңы хәҡиҡәткә алып килә: беҙҙең тормош йүнәлешебеҙ үҙебеҙгә һәм мөмкинлектәребеҙгә ярашлы әйберҙе билдәләй.

Тәүҙә атай-әсәйҙәребеҙҙән һәм башҡа ғаилә ағзаларынан, унан һуң абруйлы кешеләрҙән (әйтәйек, уҡытыусыларыбыҙҙан) һәм, ниһайәт, дуҫтарыбыҙҙан эҙләгән һөйөү һәм хуплауҙы беҙ үҙ-үҙебеҙҙе яратҡан һәм хуплаған осраҡта ғына ысынлап та тоя һәм кисерә алабыҙ. Бала саҡта нимәгәлер өлгәшер өсөн бөтә көсөңдө һалған ниндәй ҙә булһа осраҡты иҫләйһеңме? Һин үҙеңә ҡарата ғорурлыҡ, ышаныс тойғоһо кисерәһең, әгәр ҙә инде атай-әсәйең йәки башҡа берәйһе эшеңде яҡшы башҡарып сығыуың тураһында әйтһә, һин был һүҙҙәрҙең хаҡлы булыуын беләһең. Һин үҙеңдең нимәгәлер һәләтле булыуыңа раҫлау ҡабул итәһең. Шулай уҡ, минән бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ, тип уйлаған ваҡыттарыңды иҫләйһеңме? Моғайын да, өйгә эшеңде эшләмәгән, йә иһә насар итеп эшләгән ваҡытта кемдәндер шелтә эләккәндер. Хәҙер ул тойғоларҙы яңылышыу, уңайһыҙланыу йәки аҡланмаған өмөттәр тип атай алаһыңмы?

Тәүге осраҡтағы хәлдең асылы һин үҙең алдан тойомлаған хәҡиҡәтте кемдеңдер дәлилләп кенә ҡуйыуы икәнен төшөндөңмө? Үҙеңә ҡарата баһаны аңлауың уларҙан килмәне, ә улар тарафынан раҫланды ғына. Ҡайһы саҡта үҙең һоҡланған кемгәлер бер ваҡытта ла оҡшай алмаҫһың кеүек тойола, әммә ысынында был улай түгел. Был кешегә тартылыуың үҙе үк унда күреп һоҡланған сифаттарҙы үҙеңдә лә үҫтерә алыуыңа дәлил булып тора. Әммә башҡаса ла булып ҡуя. Ҡайһы саҡта беҙ теге йәки был кешеләрҙе үҙһенмәү һәм күрә алмау тойғолары кисерәбеҙ. Был беҙҙең дә үҙебеҙҙе ошолай уҡ йәмһеҙ итеп тота ала алыуыбыҙға киҫәтеү булып тора. Быңдай саҡта һөйөү, мәрхәмәтлек, хәстәрлек кеүек үҙең эйә булған сифаттарҙы һайлау мөмкинлеге барлығын аңлау мөһим.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

✓ *Илен ҡурсыған ил ағаһы булыр,*
*Илен борсоған ил буçағаһы булыр.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*

*МИЛЛӘТ ҠОР ЙЫЯ*

# ХАЛЫҠ КҮП ЕРҘӘ...

## аҡыл күп

### Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау һәм рәсми делегация составы тураһында положение

#### I. Дөйөм положениелар

1. Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты итеп 18 йәшкә еткән, хеҙмәткә яраҡлы һәр башҡорт һайлана ала.

2. Делегаттар һайлау, уларға Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты вәкәләттәре биреү - бары тик халыҡ ихтыярында.

3. Муниципаль райондар һәм ҡала округтары ҡоролтайҙары башҡарма комитеттары халыҡҡа кандидаттарҙы тәҡдим итеү тәртибен һәм ваҡытын, делегаттарҙы һайлау тураһындағы положениены еткерергә бурыслы.

4. Муниципаль райондар һәм ҡала округтары ҡоролтайҙары башҡарма комитеттары, Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)"ның төбәк бүлексәләре Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарының исемлеген халыҡҡа еткерергә, конференцияларҙа делегатлыҡҡа кандидаттарҙың программаһы буйынса фекер алышырға бурыслы.

5. Башҡортостан Республикаһы территорияһында Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегатлыҡҡа кандидаттар күрһәтеү, делегаттар һайлау, конференциялар үткәреүҙе урындағы үҙидара һәм йәмәғәт ойошмалары ярҙамында ҡоролтайҙың урындағы бүлексәләре тәьмин итә.

6. Башҡортостан Республикаһының муниципаль райондары һәм ҡала округтары, шулай уҡ Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Рәсәй Федерацияһы субъекттарындағы төбәк бүлексәләре Өсөнсә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттары мандатының 30 процентын ошо муниципаль район, ҡала округы йәки Рәсәй Федерацияһы субъектында йәшәүсе йәштәргә бүлергә тейеш.

7. Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәүселәр араһында Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау буйынса конференцияларҙы ойоштороу һәм үткәреү ошо территорияның башҡорт ҡоролтайҙары башҡарма комитеттары йәки башҡорт йәмәғәт ойошмалары тарафынан тормошҡа ашырыла.

8. Рәсәй Федерацияһы республикалары һәм өлкәләренән, БДБ һәм сит илдәрҙән рәсми делегациялар башҡорт милләтенән булған делегаттарҙан, шулай уҡ Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" башҡарма комитеты тарафынан Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын ойоштороу һәм үткәреү буйынса республика ойоштороу комитеты менән килешеү буйынса башҡарма власть органдары вәкилдәренән формалашырға мөмкин.

#### II. Делегаттар һайлауҙы ойоштороу һәм үткәреү тәртибе

1. Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау буйынса ҡала, район һәм төбәк ҡоролтайҙарын ойоштороу һәм үткәреүгә Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитеты республика ойоштороу комитеты менән берлектә дөйөм етәкселек итә.

2. Ошо положение рәсми донъя күргән көндән муниципаль район һәм ҡала округтары ҡоролтайҙары башҡарма комитеттары Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегатлыҡҡа кандидаттарҙы теркәй башларға бурыслы.

3. Кандидаттарҙы делегатлыҡҡа теркәү башҡорт ҡоролтайына Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегатлыҡҡа кандидат итеп теркәлеү тураһында яҙма йәки телдән белдереү юлы менән тормошҡа ашырыла.

4. Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегатлыҡҡа кандидаттар агитация-пропаганда эше алып барырға, граждандарҙы делегаттар һайлау буйынса конференцияла ҡатнашырға һәм тауыш бирергә саҡырырға хоҡуҡлы.

5. Делегатлыҡҡа кандидаттар ҡоролтай Башҡарма комитетына йәшәгән урыны буйынса анкета мәғлүмәттәре, 4х5 фотография, шулай уҡ үҙ программаһын тәҡдим итергә тейеш.

6. Муниципаль райондар һәм ҡала округтары башҡарма комитеттары 2010 йылдың 1 мартына тиклем Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау буйынса конференцияның регламентын, кандидаттарҙың программаһын, кандидаттын фотоһын (4х5), биографик мәғлүмәттәрен; Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау буйынса үткәрелгән конференцияның датаһы, урыны, ваҡыты мәғлүмәттәрен; Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау буйынса конференция тураһында урындағы халыҡҡа киң мәғлүмәт саралары аша мәғлүмәт биреү буйынса күрелгән саралар хаҡында мәғлүмәттәрҙе Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитетының рәсми сайтында урынлаштырыу өсөн электрон вариантта ебәрергә. Кандидаттарҙың программалары Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитетының рәсми порталында www.msoowkb.ru; www.msoowkb.info донъя күрә.

7. Башҡортостан Республикаһының муниципаль райондары һәм ҡала округтары башҡорттары ҡоролтай башҡарма комитеттары Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына альтернатив рәүештә делегаттар һайлауҙы тәьмин итергә бурыслы.

8. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының делегаттар нормаһы квотаға ярашлы билдәләнә ( БР, РФ һәм сит илдәр буйынса делегаттар һанына квоталар бүленеше ҡушымтала бирелә).

9. Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына саҡырылыусыларҙың персональ составын республика ойоштороу комитеты менән Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитеты берлектә билдәләй. Республика ойоштороу комитеты рәсми делегациялар составына өҫтәмә рәүештә башҡорт милли мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүгә һөҙөмтәле өлөш индергән кешеләрҙе лә индерергә хоҡуҡлы.

10. Делегаттарҙы һайлау тауыш биреү юлы менән 1 марттан 25 апрелгә тиклем (Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитеты төҙөгән график буйынса) республика ойоштороу комитеты һәм муниципаль райондар һәм ҡала округтары менән килешеп, делегаттарҙы һайлау конференцияһында тормошҡа ашырыла.

11. Конференцияларҙы, уларҙа делегаттарҙың вәкәләте тәртибен урындағы бүлексәләр билдәләй. Муниципаль райондар һәм ҡала округтары Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегатлыҡҡа кандидат һәм ҡатнашырға теләк белдергән һәр кемде конференция эшенә индерергә тейеш.

12. Кандидаттарҙы ҡарау, улар өсөн тауыш биреү конференцияла делегатлыҡҡа кандидаттың үҙ программаһын тәҡдим иткәндән һуң тормошҡа ашырыла.

13. Конференцияла ҡатнашыусылар делегатлыҡҡа кандидаттың программаһын өйрәнә, һәр кандидатҡа айырым тауыш бирә.

14. Башҡортостан Республикаһының муниципаль райондары һәм ҡала округтары һәм Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегатлыҡҡа төбәк башҡорттары конференцияларында күпселек тауыш алыусы Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты мандатына эйә була.

15. Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡатнашыусыларҙың персональ составы һайланған делегаттар, саҡырылған кешеләр һәм ҡунаҡтарҙан формалаша. Персональ состав киң мәғлүмәт сараларында, Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитетының рәсми мәғлүмәт порталында донъя күрә.

16. Муниципаль райондар һәм ҡала округтары ҡоролтайҙары башҡарма комитеттары Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитеты адресына конференция протоколын һәм тейешле формалағы документтарҙы ебәрә (1-се, 2-се формалар).

17. Республика ойоштороу комитеты "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы каналында, "Юлдаш" радиоһында, шулай уҡ Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитетының материалдары өсөн рәсми баҫма мәғлүмәт сараларында урын бүлергә ярҙам итә.

18. Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттары - хәл итеү, рәсми делегациялар һәм саҡырылған ҡунаҡтар кәңәш биреү хоҡуғына эйә.

### Башҡортостан Республикаһының муниципаль район һәм ҡала округтарында башҡорт ҡоролтайҙарын үткәреү графигы

1. Әбйәлил районы - 03.03.2010
2. Әлшәй районы - 16.03.2010
3. Архангел районы - 25.03.2010
4. Асҡын районы - 26.03.2010
5. Ауырғазы районы - 09.04.2010
6. Баймаҡ районы - 06.03.2010
7. Баҡалы район - 03.03.2010
8. Балтас районы - 16.03.2010
9. Бәләбәй районы - 09.03.2010
10. Балаҡатай районы - 12.03.2010
11. Белорет районы - 23.03.2010
12. Бишбүләк районы - 20.03.2010
13. Бөрө районы - 20.04.2010
14. Благовар районы - 25.03.2010
15. Благовещен районы - 08.04.2010
16. Бүздәк районы - 12.03.2010
17. Борай районы - 03.03.2010
18. Бөрйән районы - 09.04.2010
19. Ғафури районы - 26.03.2010
20. Дәүләкән районы - 26.03.2010
21. Дыуан районы - 10.03.2010
22. Дүртөйлө районы - 15.04.2010
23. Йәрмәкәй районы - 14.04.2010
24. Ейәнсура районы - 19.03.2010
25. Йылайыр районы - 20.03.2010
26. Иглин районы - 31.03.2010
27. Илеш районы - 26.03.2010
28. Ишембай районы - 11.03.2010
29. Ҡалтасы районы - 10.03.2010
30. Ҡариҙел районы - 04.04.2010
31. Ҡырмыҫҡалы районы - 26.03.2010
32. Ҡыйғы районы - 04.03.2010
33. Краснокама районы - 17.03.2010
34. Күгәрсен районы - 18.03.2010
35. Кушнаренко районы - 11.03.2010
36. Көйөргәҙе районы - 12.03.2010
37.Мәләүез районы - 26.03.2010
38. Мәсетле районы - 04.03.2010
39. Мишкә районы - 22.04.2010
40. Миәкә районы - 23.03.2010
41. Нуриман районы - 30.03.2010
42. Салауат районы - 05.03.2010
43. Стәрлебаш районы - 16.03.2010
44. Стәрлетамаҡ районы - 19.03.2010
45. Тәтешле районы - 25.03.2010
46. Туймазы районы - 25.03.2010
47. Өфө районы - 25.04.2010
48. Учалы районы - 05.03.2010
49. Федоровка районы - 14.03.2010
50. Хәйбулла районы - 03.03.2010
51. Саҡмағош районы - 19.03.2010
52. Шишмә районы - 26.03.2010
53. Шаран районы - 05.03.2010
54. Яңауыл районы - 13.03.2010
55. Ағиҙел ҡалаһы - 09.04.2010
56. Күмертау ҡалаһы - 25.03.2010
57. Межгорье ҡалаһы - 22.04.2010
58. Нефтекама ҡалаһы - 16.04.2010
59. Октябрьский ҡалаһы - 18.03.2010
60. Салауат ҡалаһы - 18.03.2010
61.Сибай ҡалаһы - 07.03.2010
62. Стәрлетамаҡ ҡалаһы - 18.03.2010
63. Өфө ҡалаһы - -
64. Дим районы - 18.03.2010
65. Калинин районы - 26.03.2010
66. Киров районы - 26.03.2010
67. Ленин районы - 23.03.2010
68. Октябрь районы - 29.03.2010
69. Орджоникидзе районы - 24.03.2010
70. Совет районы - 30.03.2010

# ҮҘ ӨЛӨШӨГӨҘҘӨ ИНДЕРЕГЕҘ!

**Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү буйынса республика ойоштороу комитетының хужалыҡтар һәм ойошмалар етәкселәренә, эшҡыуарҙарға, Башҡортостан Республикаһы халҡына, Рәсәй Федерацияһында, БДБ һәм алыҫ сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштарыбыҙға мөрәжәғәте**

2010 йылдың 11-12 июнендә Өфөлә Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы үтәсәк. Ул башҡорт халҡының һәм Башҡортостан Республикаһында йәшәүсе халыҡтарҙың телен үҫтереүгә, социаль-иҡтисади хәлен, рухи-мәҙәни тормошон артабан да яҡшыртыуға, уларҙың дуҫлығын һәм милләт-ара килешеп йәшәүен нығытыуға йүнәлтелгән мәсьәләләрҙе тикшерәсәк һәм тейешле ҡарарҙар ҡабул итәсәк.

Шул маҡсаттан, Башҡортостан Республикаһы халҡына, Башҡортостандан ситтә, шулай уҡ БДБ һәм алыҫ сит илдәрҙә йәшәгән бөтә милләттәштәребеҙгә, хужалыҡтар һәм ойошмалар етәкселәренә, эшҡыуарҙарға, башҡорт халҡының социаль-иҡтисади хәлен, рухи-мәҙәни тормошон артабан да яҡшыртыу, телен үҫтереү проблемаларына битараф булмаған һәр кемгә, Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын әҙерләү һәм үткәреү эшенә ҡулынан килгәнсе үҙ өлөшөн индерергә саҡырып мөрәжәғәт итәбеҙ.

**Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитетының реквизиттары:**

р/с 40703810700000000149
в филиале
ОАО "УралСиб" г.Уфа
БИК 048073770
к/с 30101810600000000770
ИНН 0274095117
КПП 027401001

**Ойоштороу комитеты.**

ЗАУЫҠ

# УЛАНДАРЫМ, ТЫҢЛАП ТОРОҒОҘ:

## Гел түңәрәк булһын ҡороғоҙ...

### Ҡыйыуһыҙ егет йыры

(Шаярыу ҡатыш)

Етмәҫ, ахыры, ҡыйыулығым
Хистәремде яҙырға...
Мөмкиндер ул һылыуҡайҙың
Күҙҙәренә бағырға?
Етмәҫ кеүек батырлығым
Ҡулдарынан ҡыҫырға.
Мөмкин микән нескә генә
Билкәйенән ҡосорға?
Барам әле һылыуыма
"Һөйәм!" һүҙен әйтергә.
Нинә ул һүҙ тел осонда
Тора һаман әйтелмәй?
Етмәҫ инде бер ҡасан да
Уны әйтергә көсөм -
Ҡыйыулыҡ та кәрәк икән
Ҡыҙҙарҙы һөйөр өсөн.

Лилиә ҺАҠМАР.

### Уландарым

Уландарым, тыңлап тороғоҙ:
Гел түңәрәк булһын ҡороғоҙ.

Ситләшкәндә бәрәй-берегеҙ,
Ишетегеҙ: инрәй Ерегеҙ.

Уландарым, тыңлап тороғоҙ:
Йәнтөйәктә тормош ҡороғоҙ.

Донъя сите китек, тимәгеҙ,
Сит икмәккә башың эймәгеҙ.

Уландарым, һүҙҙе тотоғоҙ:
Һүнмәҫ булһын усаҡ утығыҙ.

Ҡыйыҡ тартһа ла, тим бизмәне,
Донъяларҙан берүк биҙмәгеҙ!

Донъяның бит ете ҡаты бар,
Әсеһе лә уның, таты бар.

Һин күрмәгән уның һаны бар,
Һин белмәгән уның зарҙы бар.

Зыялыға зиһен биге юҡ,
Йөрәклегә йыһан сиге юҡ.

Уландарым, тыңлап тороғоҙ:
Тәүфиҡ менән донъя ҡороғоҙ...

Уландарым, иҫтә тотоғоҙ:
Иман һәм рух - ғүмер ҡотоғоҙ.

Тамара ИСКӘНДӘРИӘ.

### Абдрахман

("Абдрахман" йырын тыңлағанда)

Ахрызаман килеп еткән кеүек,
Абдрахман, һин йәнде үкһетәһең,
Әйтерһең дә, минең анау юлдан
Бер ҡасан да инде юҡ үтәһем.

Әйтерһең дә, анау ҡояшҡа мин
Күҙ тултырып бағам һуңғы тапҡыр.
Абдрахман, һин ая минең йәнде,
Дауыл саҡыр минә, ҡойон саҡыр!

Һағышынды дауыл алып осһон -
Ҡалҡыналмам юҡһа был мон-зарҙан.
Үҙ көсөмә тағы ышанайым,
Килгәндә лә ергә ахрызаман.

Мин тормошҡа тағы ышанмайым,
Һатһа, һатҡан инде башты дуҫтар.
Дуҫлыҡ барлығына шикләндермә -
Ҡотҡар яман уйҙан, мине ҡотҡар!

Анау юлдар мине саҡыра бит,
Күҙем күрә әле ҡояш нурын.
Абдрахман, һин йәнде үкһетәһең,
Ысынлап, был әллә һуңғы йырың!?

Фәкиһә ТУҒЫҘБАЕВА.

### Атайым

Атайым һис әрләмәне,
Өйрәтмәне,
Тик һәр һүҙе маяҡ төҫлө
Йөрәктәге.

Атайымдың яратыуы
Булды һабаҡ,
Ауыр саҡта ул әле лә
Бергә һымаҡ.

### Азаматҡа

Балам, һине ҡабат табыр инем,
Тик был замандан мин ҡасыр инем,
Һинең өсөн ғаләмдәрҙә йөрөп,
Яны йондоҙҙарҙы асыр инем.

Балам, һине ҡабат табыр инем,
Алла булып һинә бағыр инем,
Ҡараш менән хатта рәнйетмәйсә,
Бөйөклөк тип һинә ҡағылыр инем.

Йомабикә ИЛЬЯСОВА.

### Ата ояты

Үҙәк телевидениела элек фашист булған кешенең улы биргән интервью йөкмәткеһе.

"Кәрәкмәй бала -
Йәлләд тоҡомо!"
Фашистың улы
Һөйләй уҡынып,
Ала суҡынып:
"Юҡ, мин түгелмен
Әҙәм йораты.
Юйылмаҫлыҡ тик
Атам ояты".

Фашистың улы
Әйтә аятын...

Кәрәкмәй уға
Вәхши нәҫеле,
Ҡантуғанлыҡтан
Ҡайтҡан әҫәре!
Выждан сафлығы -
Һөйләр мәҫәле.
Рухи туғанлыҡ -
Данлар әҫәре.

Таңһылыу ҠАРАМЫШ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 февралдә** Ф.Бүләковтың **"Мөхәббәт ҡарағы"** музыкаль комедияһы.
**25 февралдә** Ф.Бүләковтың **"Эх, күгәрсенкәйҙәрем"** мелодрамаһы.
**26 февралдә** Х.Зариповтың **"Их, кәләше лә кәләше"** музыкаль комедияһы.
**27 февралдә** Н.Гәйетбаевтың **"Әй эттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** комедияһы
**28 февралдә** М.Ғиләжевтың **"Һөйәм, һағынам..."** комедияһы.

**Бәләкәй сәхнә**

**26, 27 февралдә** Вуди Аллендың "Осоусы лампа" пьесаһы буйынса **"Хәйерле иртә, Энид!"** спектакле премьераһы күрһәтеләсәк.

**КЕМ АЛЫҠ?**

Түбәндәге һорауҙарға тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап бирәүсе ике кеше театр тамашаларына саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк. Йәгеҙ, кем алыҡ?

**1.** "Мөхәббәт ҡарағы" спектакленең режиссеры кем?

**2.** "Их, кәләше лә кәләше" спектаклендә Илдар Сәйетов ниндәй роль башҡара?

**Яуаптар 8-937-3419192 телефон һандары буйынса шаршамбы көнө ҡабул ителә.**

### Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 февралдә** 10.00, 12.00 сәғәттә В.Гауфтың **"Кәлиф аист"** әкиәте.
**25 февралдә** 10.00, 12.00 сәғәттә С.Суринаның **"Алтын балта"** әкиәте.
**26 февралдә** 10.00, 12.00 сәғәттә А.Әхмәтованың **"Ғимаҙи мажаралары"** әкиәте.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 февралдә** халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты, ҡурайсы **Рөстәм Шәрипов "Ҡурай моңдары..."** исемле концерт программаһына саҡыра.
**27 февралдә** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Ихлас" эстрада төркөмө етәксеһе **Радик Вәлмөхәмәтов "Йырҙар нығыта дуҫтар араһын"** исемле концерт программаһы менән сығыш яһай.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, ығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АЛДЫҢА МАҠСАТ ҠУЙ,

## теләктәр артынан эйәреүсе булма

Беҙ үлемдән ҡасып ҡотолоп булмаясағын беләбеҙ, ләкин, барыбер бер шартларын белә тороп, һабын ҡыуығына өрөүҙе дауам итәбеҙ.

**(А. Шопенгауэр).**

Бөтә кешеләрҙең дә маҡсаты бирәү генә булырға тейеш: бирәү, шул уҡ ваҡытта һәр береһенә һәм бөтөн йәмғиәткә файҙа килтерә торған маҡсат.

**(Цицерон).**

Бөйөк кешеләр үҙ алдына маҡсат ҡуя, ә ҡалғандар үҙ теләктәре артынан ғына эйәрә.

**(И. Шевелев).**

Ул инде маҡсатын ҡыуып етә алмаҫ, сөнки... маҡсаты бик ныҡ артта тороп ҡалған.

**(С. Лец).**

Наҙандар өсөн ҡартлыҡ - ҡыш мәле, ғилемлеләр өсөн - уныш йыйыу ваҡыты.

**(Ф. Ларошфуко).**

Ҡарт шағир, ҡарт һөйәркә, ҡарт йырсы, ҡарт ат... бер нигә лә яраҡлы түгел.

**(Вольтер).**

Ҡартлыҡ килеү менән беҙҙең шатлыҡтар ғына түгел, өмөттәр ҙә юҡҡа сыға - бына шуныһы ҡурҡыныс уның.

**(Жан Поль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике ағайлы-ҡустылы йәшәгән. Уларҙың береһе ҡәбәхәт һәм енәйәтсе, ә икенсеһе уңышлы кеше булып үҫеп киткән, үҙенең изге эштәре менән билдәлелек яулаған. Бер енсеһен енәйәт эшләгәне өсөн хөкөм иткән саҡта, уға шундай һорау биргәндәр:**
**- Һеҙ нисек енәйәтсе булып киттегеҙ?**
**- Минең бала сағым ауыр үтте, - тигән ул. - Атайым эсте, әсәйемде лә, мине лә туҡманы. Башҡаса мин кем була ала инем?**
**Бер нисә көн үткәндән һуң бер журналист, енәйәтсенең ағаһы бар икәнен белеп, уға шул уҡ һорау менән мөрәжәғәт иткән:**
**- Һеҙ үҙегеҙҙең ҡаҙаныштарығыҙ менән билдәле. Нисек һеҙ был үрҙәрҙе яулай алдығыҙ?**
**- Минең бала сағым ауыр үтте, - тип яуап биргән уңышлы ағай. - Атайым эсте, әсәйемде лә, мине лә туҡманы. Башҡаса мин кем була ала инем?"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррират:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 641